ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15 йыл

11-17 ноябрь (ҡырпағай) 2017

№45 (775)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Һабаҡтар



2-3

Ғаиләләр тантанаһы



5

"Юлдаш" радиоһы - ул аудио-тормош,



ул һәр кемдең ғаилә ағзаһы кеүек...

8-9

Балҡан илдәре менән таныштым...



12-13

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!***
***2018 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 559 һум 56 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 589 һум 56 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 447 һум 64 тингә яҙыла алаһығыҙ.***

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

## ЗАМАНҒА АУАЗДАШ

**Был баҫма тулыһынса минең талаптарыма тап килә, быға ҡайһы саҡта хайран ҡалып ҡуям. Хатта шулай тип әйтер инем: беренсе һанынан алып ул минең күңелемдә бары тик ҡәнәғәтлек тойғолары ғына уята.**

Мин көләмәстәр, йондоҙнамәләр, "бөйөк" кешеләр хаҡындағы оҙон-оҙон мәҡәләләр, шулай уҡ уйҙырма тарихтар уҡырға яратмайым. "Киске Өфө" мине ошоларҙан азат итә. Бөтөн баҫмалар реклама менән сыбарланған мәлдә, реклама булмауы ла оҡшай. Баҡса, аш-һыу темаһы ла сама менән генә. Ә бына интервьюларҙы яратып уҡыйым, һәр әңгәмә шәхесте тулыһынса асыуҙы бурыс итеп ҡуя. Арабыҙҙа ҡайһылай шәп милләттәштәребеҙ, матур ғаиләләр, аҫыл йәштәребеҙ бар икән, тип уйлап ҡуяһың. Театр яратам, шуға ла театр әһелдәре менән әңгәмәләр - көтөп алынған "ҡунаҡ". Тарихҡа бәйле материалдар үҙе бер хазина. Әле бына һуңғы ваҡытта "Улар автономия яуланы" тигән рубрика менән баҫылғандары күпме мәғлүмәт бирҙе. Ҡыҫҡаһы, беҙ был гәзит менән бер юҫыҡта фекер йөрөтәбеҙ, шуға ла уның ыңғай яҡтарын оҙаҡ һанарға мөмкин булыр ине.

Хәҙер бер нисә теләгемде белдерергә теләйем. Минеңсә, бөгөнгө көндә гәзит уҡыусыға үҙенең тематик асылын тулыһынса аҡлаған ижтимағи-сәйәси гәзит кәрәк. Икенсе-өсөнсө биттә, мәҫәлән, илдә, республикала булған яңы ваҡиғалар хаҡында аналитик мәҡәләләр мотлаҡ һәм йышыраҡ булһын ине. Сөнки теге йәки был хәл булған, тигән мәғлүмәтте мин башҡа сығанаҡтарҙан да ишетәм, ә гәзиттә был турала тулыраҡ уҡырға теләр инем. Шулай уҡ иҡтисад тураһында тематик мәҡәләләр күберәк булһын ине. Беҙҙең халыҡ яңы закондар тураһында ла хәбәрҙар булмай, нишләптер, шуға күп осраҡта үҙенең хоҡуғын да белмәй, үҙен яҡлай ҙа алмай. Ә былай, исмаһам, ана, "Киске Өфө" шулай тип яҙған, тип үҙ-ара һөйләшеп булһа ла алырҙар ине.

**Гүзәл ӘХМӘҘИЕВА.**
**Өфө ҡалаһы.**




## БЕҘҘЕҢ ГӘЗИТ УЛ!

**"Киске Өфө" гәзитен сыға башлаған йылдарҙан алдырам. Ул ваҡытта Стәрлетамаҡта эшләгән осором ине. Башҡортостан мәҙәниәте һәм тарихы буйынса дәрестәр алып бара һәм гәзиттәге материалдарҙы эшемдә киң ҡуллана инем. Гәзит күңелемә шунда уҡ яҡын булды, сөнки һәр ваҡыт аңыбыҙҙы уятыусы, рухыбыҙҙы күтәреүсе баҫма итеп ҡабул иттем уны.**

Баҫылған мәҡәләләрҙең бер бөртөгөн дә ҡалдырмай уҡып сығам. Гәзиттәге һәр рубрика ҡыҙыҡлы, бөтә яңылыҡтар, көнүҙәк мәсьәләләр тураһында ла мәғлүмәт яҡтыртыла, уның йөкмәткеһен тағы ла нисек тулыландырырға була, тигән һорау тыумай ҙа хатта. Темаларҙы елегенә үткәреп аса белеүе һоҡландыра гәзиттең, башҡорттар араһындағы күренекле шәхестәр, бигерәк тә йәштәр менән әңгәмәләр, урта биттәрҙә баҫылған "Диалог", "Монолог", "Түңәрәк ҡор" рубрикалары оҡшай.

Заманы шул, беҙ бөгөн бер-беребеҙҙе мәғлүмәт саралары аша танып беләбеҙ, арабыҙҙа шундай шәхестәр бар икән, йәштәр шулай үҫә икән, тип уҡып, һығымталар яһап, күңел күтәрелә. Гәзит уҡып, милләттәштәр бер-береһен ихтирам итергә, ҡәҙерләргә, ғорурланырға ла өйрәнә, шул уҡ ваҡытта башҡорт донъяһындағы, илдәге иң һуңғы яңылыҡтар менән дә таныша. Яңылыҡтарға йыш ҡына төрлө белгестәрҙең фекере, баһаһы бирелә, гәзит уҡыусы ла уларға эйәреп уйларға күнекһен һәм зиһенен үҫтерһен өсөн шулай ителәлер инде, бик хуп.

"Киске Өфө" гәзитенә ҡыҫҡа ғына билдәләмә бирегеҙ, тиһәләр, мин уны "Беҙҙең гәзит" тип атар инем. Башҡорт кешеһенең күңелен байытҡан, рухын күтәргән, тарихына һәм йолаларына ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған, киләсәген ҡайғыртырға өйрәткән гәзит - "Киске Өфө". Үҙем белгән-күргән кешеләрҙең бөтәһенә лә был хаҡта әйтә йөрөйөм, бары тик изге ниәт менән һәм яҡтылыҡҡа әйҙәү өсөн баҫылған гәзит тураһында күберәк кеше белһен, тием.

Тыуған телемдә баҫылған, күңелемә иң яҡын матбуғат баҫмаларының береһе - "Киске Өфө" гәзитен 15 йыллыҡ юбилейы менән тәбрикләйем. Киләсәктә лә маҡсаттарына, идеяларына тоғро ҡалып, сәләмәтлектә ошо хеҙмәтте дауам итергә, халыҡ менән бергә ҡалырға яҙһын!

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА.**
**Бөрйән районы.**

12+

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ!

# ХАЗИНАҒА ТОРОШЛО

**Бөгөнгө көндә өйөнә тиҫтәләгән гәзит-журнал алдырыусыны тап итеүе ауыр. Шулай ҙа аҡҡа ҡара менән яҙылғандың - ваҡытлы матбуғаттың дуҫы булып ҡалыусылар бар. Мәләүез ҡалаһында йәшәүсе Рәфилә САТТАРОВА нәҡ ошондай кешеләрҙең береһе. Уның өйөнә Рәсәйҙә һәм республикала баҫылып сыҡҡан әллә күпме гәзит-журнал килә. Улар араһында "Киске Өфө" лә бар.**

- Бөтә ошо төрлөләлөк араһында иң яратып уҡыған гәзитем - "Киске Өфө". Баҫылып сыға башлағаны бирле алдырам һәм әлегә тиклем баҫма ҡәнәғәтһеҙлек килтергәне юҡ. Үҙ уҡыусыһына ҡыҙыҡлы, файҙалы һәм кәрәкле гәзит булараҡ танылған гәзиттең һәр бите хазинаға торошло. Баҫма ысынлап та халыҡ өсөн эшләй һәм быны тәүге биттә үк - "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһында асыҡ күрергә мөмкин. Һорау һәм яуапты дөйөмләштереп яҙыуға ҡарағанда, уҡыусының "тере" фекере күңелгә ныҡыраҡ үтеп инә. Шулай уҡ рубрикалағы һәр тема нәҡ әлеге мәлдә көнүҙәк борсоған идеяларҙы күтәреп сығыуы менән актуаль. Хәл ителәһе мәсьәләләргә ошо рәүешле, йәғни йәмғиәт менән берлектә тотоноһа, күп эштәрҙе аткарып сығыуға була.

Гәзит тарафынан халыҡ фольклорына, уның йола, ғөрөф-ғәҙәттәренә ҡарата булған иғтибары баһалап бөткөһөҙ. Тағы ла "Башҡорт ҡамусы" рубрикаһы! Ул бик иҫәпле генә кеше белгән мәғлүмәттәргә юл күрһәтеүсе, үҙ тарихыбыҙға күҙебеҙҙе асыусы, аңыбыҙҙы иҫ китмәле итеп мәғлүмәти яҡтан байытыусы. Ғөмүмән, "Тарихнамә" һәр башҡорт уҡырға тейешле бит, минеңсә. Ошонда уҡып белгән тарихи факттарҙы балаларыма, ейән-ейәнсәрҙәремә һөйләйем, ҡыҙыҡһындырам. Шунда уҡ гәзитте ҡулдарына алмаһалар ҙа, йөрәктәренә осҡон һалып ҡуйғас: "Әсәй, теге ваҡыт шул тарихи ваҡиғаны йәки тарихи шәхес тураһындағы мәғлүмәтте һөйләп бөтмәнең. Тулыһынса белмәйенсә, күңелдә өйкәп тик тора", - тип аҙаҡ барыбер үҙҙәре уҡып бөтөп ҡуя. Ә тарихын белгән кеше рухи яҡтан көслө була.

"Баш ҡалам"ды уҡып, урындағы халыҡҡа, килгән ҡунаҡтарға Өфөлә нимә оҡшауын йәки, киреһенсә, күңелдәренә ятмауын беләм. Өфөләрҙең һөйөнөстәренә бергә шатланам, сөнки ундағы хәл-ваҡиғаларҙың ауазы бөтә республикаға таралып, беҙгә лә ҡағыла. "Өфө башҡорто" рубрикаһы ла оҡшаны. Шунда тыуып үҫкән кеше, килеп-китеп йөрөүселәрҙән айырмалы рәүештә, Өфөнө бөтөнләй башҡаса күрә, аңлай, ҡабул итә. Уларҙың бала саҡ иҫтәлектәрен уҡып, үҙемде шул ваҡыттағы Өфөлә йөрөгән кеүек хис итәм.

Иманлы ил - көслө ил. Гәзиттең дингә биргән иғтибары оло хуплауға лайыҡ. Баҫма үҙ уҡыусыһын йөҙәтмәй генә кәрәкле дини мәғлүмәтте лә сағылдырыуға өлгәшә. Уҡыған һайын уҡыйы килеп тора.

Гәзит-журналдарҙы күпләп алдырһам да, баш баҫып китап уҡып ултырыусыларҙан булманым. Ләкин "Киске Өфө"ләге "Һәр кем уҡырға тейешле йөҙ башҡорт китабы" акцияһы минә яңы йүнәлеш бирҙе. Теҙмәлә бирелгән китаптарҙы ййлап уҡый башлап, әҙәбиәт донъяһына сумыуымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Һәм бындай үҙенең туған әҙәбиәтенә "ҡайтыусы" кеше бер мин генә түгелдер, тием.

Хөрмәт иткән, яратҡан гәзитемә тағы ла оҙон-оҙаҡ йылдарға һуҙылған ғүмер теләйем. Әлегеләй зауыҡлы баҫма булып ҡал, "Киске Өфө"!

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# ҺАБАҠТАР



Көйөргәҙеләр "Башҡортостан"ды ҡотлай.

## "Башҡортостан" гәзитенә - 100 йыл

**Нимә ул тәжрибә? Ул - донъяуи аҡыл, үткер күҙ, һаҡ ҡолаҡ, үҙ-үҙеңә ышаныс, ул байлыҡ, ул хазина һандығы. Ә инде ошо хазина һандығының тулылығы, йөкмәткеһе, асылы һин үткән мәктәп дәрестәренә, остаздарың һабаҡтарына бәйле.**

Үҙем алған тәжрибә мәктәбе тураһында һүҙ башлаһам, әлбиттә, ул ошо көндәрҙә 100 йыллығын билдәләгән "Башҡортостан" гәзите редакцияһында алған һабаҡтарым тураһында булыр. Журналист һөнәрендә ныҡыныуҙың иң иҫтәлекле лә, иң һынылышлы ла, бөтә яҡлап һынала торған мәлендә 20 йылдан ашыу эшләнем мин унда. Шуныһы ҡыҙыҡ: 80-се йылдарға тиклем журналислыҡ ир-егет һөнәре булып иҫәпләнгән булған икән. "Башҡортостан" гәзитендә лә ул саҡта, корректорҙарҙы, тәржемә бүлеген, машинкала баҫыусыларҙы иҫәпләмәгәндә, шау ир-егет эшләй ине. Был һөнәрҙең "иң түрендә" ултырыусы, уның бар нескәлектәрен үҙләштереүсе, булған ҡатмарлыҡтарҙы һис ниндәй ауырлыҡһыҙ ғәмәлгә ашырыусы, аслыҡын да, яланғаслығын да, тыл ауырлыҡтарын да татыусы, һуғыш юлдарын да үтеүсе ир-егеттәр ине улар.

1980 йылдарҙан һуң ғына "Башҡортостан" гәзите редакцияһының журналистар корпусында тәүгә ҡатын-ҡыҙ күренә башлай. Быйна шул осорҙа киленде был редакцияға эшкә. Олпат, тәжрибәле ағайҙарҙың - Абдулла Исмәғилев, Абдрахман Йосопов, Дәүләткирәй Мәһәҙиев, Абдрахман Баязитов, Аҡмалетдин Саптаров, Кинйәғәле Амантаев, Азат Байсурин, Әниф һәм Шәүкәт Биҡҡоловтар, Ғәтиәт Үзбәков, Юныс Әхмәҙиев, Заһир Исмәғилев, Ислам Мырҙабаев, Марсель Ҡотлоғәлләмов, Фәтҡулла Комиссаров, Мөхтәр Тимербулатов, Фәтих Абдуллин, Ильяс Иҫәнбаев, Хәмит Шәрипов, Рәүеф Насиров, Ризуан Хажиев, Аҫылғужа Баһуманов, Ғәлим Хисамов, Сабир Шәриповтар мәктәбендә беҙ, бер төркөм ҡатын-ҡыҙ - мин, Фәүзиә Иҙелбаева (Мөхәмәтшина), Гөлсирә Ғайсарова (Ғиззәтуллина), Динә Арыҫланова, Әлфиә Аҡбутина һабаҡтар ала, тәжрибә үҙләштерә башланыҡ. Профессиональ өлкәләге һынауҙарҙы ғына түгел, беҙгә, ҡатын-ҡыҙ журналистарға, үҙеңдә ошо ирҙәр менән бер сафта булыр шәхси сифаттар булдырыуын ла һынауҙар үтергә тура килде. Йәғни, ауыр командировкаларға сығырға кәрәк икән, һиңә бер ниндәй ташлама ла яһалмай. Дежурлыҡтарҙан төнгө 2-3-тәрҙә ҡайтырға тура килә икән, шулай уҡ ташлама юҡ, йә редакцияла йоҡлап ҡалаһың, йә өйгә такси алып ҡайтып китергә тура килә. Өйөндә балаларың көтөп ултырыу-ултырмау иҫәпкә алынмай - эштән һуң тотҡарланып, иртәгәге номерға тиген материалынды тапшырмайынса, ҡайтып китергә лә хоҡуғың юҡ.

Мөхәррирҙәрҙең мөхәррире булған Абдулла Ғиниәт улы Исмәғилевтың "сыбыртҡыны" беҙҙе, йәштәрҙе, күпкә өйрәтте: грамоталы яҙырға, бирелгән заданиены тиҙ генә үтәргә, журналислыҡ менән бергә, тәржемәсе, корректор кеүек йәнәш һөнәрҙәрҙе лә үҙләштерергә, яуаплылыҡ, эҙләнеүсәнлек, теге йәки был мәсьәләне, ялыуҙарҙы, уҡыусылар хаттарын тикшергәндә алтын урталыкта булыу кеүек мөһим сифаттарҙы уның ярҙамында үҙләштерҙек.

Ә бына унан һуң килгән баш мөхәррирҙең - Мансур Әнүәр улы Әюповтың эш стиле бөтөнләй икенсе булды. Илдә үҙгәртеп ҡороуҙар бара. Быға тиклем бикле булған темаларға ҡорғандар асылды. Мансур Әнүәр улы беҙҙе темалар, идеялар, фекерҙәр менән өйөп ташланы. Беҙгә яңы һулыш, үҙгәрештәр оҡшай ине. Шуға ла Мансур Әнүәр улының талаптарына күнергә тырыштыҡ. Заман һынауын ғына түгел, үҙара мөнәсәбәттәр ҡатмарлылығын да, тәңөләүҙәр ҙә, фекерҙәр бәрелешен дә кисерергә тура килде. Иң мөһиме шул: "Совет Башҡортостаны" ул саҡта республикалағы иң ҡыҙыҡлы, абруйлы гәзиттәрҙең береһе булды. Шулай, үҙгәрештәр дауылынан редакциябыҙ "карабын" бик оҫта, лайыҡлы алып сыҡты Мансур Әнүәр улы. Ул беҙҙе ваҡыты менән дыуамал, ваҡыты менән сабыр булырға, кәрәк икән, утҡа инергә, әммә ләкин Хәҡиҡәт тигән бөйөклөккә тоғро ҡалырға өйрәтте.

Мансур Әнүәр улынан һуң килгән баш мөхәрриребеҙ Тәлғәт Ниғмәтулла улы Сәғитов беҙҙең

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика Башлыҡы Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйған "Башҡортостан Республикаһында Яңы 2018 йылды байрам итеү тураһында" указға ярашлы, Яңы йыл сараларына әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса ойоштороу комитетына профилле министрлыҡ һәм ведомстволар менән берлектә биш һәм унан күберәк балаһы булған ғаиләләрҙәге 14 йәшкә тиклемге балаларға Яңы йыл бүләктәре һатып алырға, шулай уҡ һөнәри белем биреү ойошмаларында уҡыған етемдәргә һәм атаәсә ҡарауынан ҡалған балаларға матди ярҙам күрһәтергә ҡушылды.

✓Башҡортостан Башлыҡы Рөстәм Хәмитов Силәбелә үткән XIV Рәсәй һәм Ҡаҙағстан төбәк-ара хеҙмәттәшлек форумында ҡатнаша. Форумдың пленар ултырышын Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин һәм Ҡаҙағстан Республикаһы Президенты Нурсолтан Назарбаев аса. Форум программаһында "Кешелек капиталын үҫтереү" тигән күргәҙмә, Рәсәй-Ҡаҙағстан Эшлекле советы ултырышы, Рәсәй һәм Ҡаҙағстан юғары уҡыу йорттары ректорҙары форумы, башҡа саралар ҡаралған.

✓Урман фондының янғын хәүефһеҙлеге мәсьәләләре төбәктә хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү буйынса даими эшләүсе координация советы ултырышында тикшерелде, уны Башҡортостан Башлыҡы Рөстәм Хәмитов алып барҙы. Быйыл 38 урман янғыны теркәлгән, шул уҡ ваҡытта уларҙың күбеһе ут менән һаҡсыл ҡулланмау, иғтибарһыҙлыҡ арҡаһында килеп сыҡҡан, тип хәбәр итте республика етәксеһе. Урмандарҙа янғын хәүефе ҡағыҙәләрен боҙған өсөн 500-гә яҡын кеше административ яуаплылыҡҡа тарттырылды.

✓Республика Башлыҡы Рөстәм Хәмитов Башҡортостандан Бөтә донъя йәштәр һәм студенттар фестивалендә ҡатнашыусылар һәм волонтерҙар менән осрашты.14-22 октябрҙә Сочиҙа үткән XIX Бөтә донъя йәштәр һәм студенттар фестиваленд ә Рәсәй исеменән илдең бөтә төбәктәренән 10 мең ҡатнашыусы һәм 5 мең волонтер, шул иҫәптән Башҡортостандан 200 ҡатнашыусы һәм 50 волонтер йыйылғайны. Республика Башлыҡы йәштәр менән уларҙың алған тәжрибәнән артабан республика кимәлендә үтәсәк йәштәр фестивален ойоштороу өсөн файҙаланыу мөмкинлеген тикшерҙе.

**✓ *Ул шулай тигән: "Нимә ул яҡшы гәзит? Ул милләттең үҙ-үҙе менән һөйләшеүен ойоштора алған гәзит". Ун биш йыл буйы шуға ынтылабыҙ. Беләбеҙ, был ынтылыш әле... 110 проценты менән атҡарылып та бөтмәгәндер.***



ажғырлыҡты бер аҙ баҫып, теҙгендәрҙе тарта төштө. Аҡыллылыҡ, сабырлыҡ, башта барыһын да бизмәнгә һалып үлсәп, шунан ғына һығымта яһауҙы талап итте. Журналист өсөн былары ла бик мөһим. Ғөмүмән, Тәлғәт Ниғмәтулла улының ошо "ете ҡат үлсәп" эш итеүе коллективыбыҙға суверенитет яулау йылдары һынауҙарын, дөрөҫ ҡарарҙар ҡабул итеү осорон имен-аман үтергә ярҙам иткәндер, тим. Һәр хәлдә, яңы замандың яңы етәкселәре, ысын демократтар булды Мансур Әнүәр улы ла, Тәлғәт Ниғмәтулла улы ла. Беҙ, бер нисә йәш журналист, тап шул йылдарҙа редакция эше менән параллель рәүештә суверенитет яулаусылар рәтенә баҫып, документтар әҙерләштек, уларҙы машинкала баҫтыҡ, хат еткән бар ергә хаттар ебәрҙек, ҡултамғалар йыйҙыҡ. Был эштәрҙе ҡайһы саҡта редакциялағы эш ваҡыты иҫәбенә лә башҡара торғайныҡ. Ә етәкселәребеҙҙең беҙҙе "сит эштәр менән булаһығыҙ", тип киҫәткәнен, тыйғанын хәтерләмәйем...

Мөхәррирҙәрем генә түгел, хеҙмәттәштәрем дә төрлө булды. Егерме йылдан ашыу иңгә-иң терәшеп эшләгән коллективыма, һәр кеменә рәхмәт тойғоһо һаҡлайым. Улар миңә дуҫлыҡ, тоғролоҡ, сабырлыҡ, изгелек, матурлыҡ, талантлылыҡ, маһирлыҡ өлгөһөн күрһәтте. Икейөҙлөлөк, ярамһаҡланыу, даланһыҙлыҡ, битарафлыҡ, эшлекһеҙлек өлгөһө күрһәтеүселәргә лә рәхмәтлемен, сөнки улар аша доньяла ошондай сифаттар, мөнәсәбәттәр барлығына, аҡты ҡаранан айырырға өйрәндем. Былары ла кәрәк журналисҡа. Аҡты ҡаранан айыра белмәһәң, орлоҡто кәбәге менән бутай торған булһаң, һинең журналист булып йөрөүеңә ни һан!

...Бына ошо иҫтәлектәр, хәтирәләр бер-бер артлы күҙ алдынан үтте теге аҙнала "Конгресс холл" бинаһында "Башҡортостан" гәзитенең 100 йыллығына арнап үткәрелгән кисәлә. "Ошо гәзиттә эшләүебеҙ, күпмелер ғүмер өлөшөбөҙ ошо гәзит менән бәйләнгән булыуы менән бәхетлебеҙ", - тине барлыҡ баш мөхәррирҙәр исеменән сығыш яһаусы Тәлғәт Ниғмәтулла улы. Эйе, бәхетлебеҙ. Оҫтаханаларҙың да оҫтаханаһы булған был мәктәптә беҙ, журналистар, эшләгән эшен, башҡарған ғәмәлең милләт алдында йөҙөңдө ҡыҙартмаҫлыҡ булырға тейеш, тигән һабаҡ алғанбыҙ, ғүмер юлында ошо маҡсатҡа ынтылып йәшәгәнбеҙ, эшләгәнбеҙ. Ошо маҡсат әле лә йөрәктә...

## "Киске Өфө"гә - 15 йыл

**"Башҡортостан" гәзитендә туплаған "түл", уның мәшһүр баш мөхәррирҙәре, өлкән журналистар биргән хеҙмәт һабаҡтары, һис шикһеҙ, бынан 15 йыл элек баш ҡаланың башҡорт телендәге "Киске Өфө" аҙналығын ойоштороғанда ярҙам итте. Был мәктәптең тәжрибәһе мәҡәлә яҙа белеү, текстарҙы мөхәррирләү менән генә сикләнмәй ине бит. Редакцияла эшләгәндә әүҙем йәмәғәт эштәрендә ҡатнашырға, гәзит уҡыусылар менән осрашыуҙар ойоштороrға, төрлө кимәлдә һөйләшеүҙәр алып барырға, оло вазифалағылар менән аралашырға өйрәнелгәйне.**

Шулай итеп, 6 ноябрҙә "Киске Өфө" гәзите сыға башлауға ла 15 йыл тулды. Был урында бер аҙ тарихи һүҙ кәрәктер, шулай бит? Ә тарих шунан ғибәрәт: журналистар менән бер осрашыуҙа ул саҡтағы Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов "Ни өсөн баш ҡаланың һаман да башҡорт телендәге үҙ гәзите юҡ?" тигән һорау-дәғүәһен әйтеп һала. Был һүҙҙәрҙе ҡолағына һәм күңеленә индереп, "Вечерняя Уфа" гәзитенең ул саҡтағы энтузиаст баш мөхәррире Марат Муллаҡаев үҙенең редакцияһы эргәһендә был проектты башлап ебәрергә тәүәккәлләй һәм "Башҡортостан" гәзитендә егерме йылдан ашыу эшләп, инде ҡанға һеңгән, инде күнегелгән эштән айырылырға теләмәгән миңә йүгереп килә. Бурыстың үтә ныҡ яуаплылығын аңлаған мин, күпмелер икеләнгәндән һуң, үҙемде "боҙло һыуға" ырғытам...

Юл башында, йәғни йәш журналистар Әлфинә Ҡарағужина, Айҙар Хәкимйәнов, Валера Ғәйнетдинов, Азат Ярмуллин, гәзитте версткалаусы Шамил Харисов, корректор-тәржемәсе Әминә Имашевалар ҙан бер коллектив туплап, эш башлағанда Марат Муллаҡаев тәҡдим иткән проекттың бары тик "Киске Өфө" тигән атамаһы ғына бар ине. Проект бөтөн асылы, эстәлеге, рухы менән эш барышында ижад ителде. Иң тәүҙә, әлбиттә, баҫманың йөкмәткеһе барыбер үҙ уҡыусыларын ишәйтәсәк, тигән инанысыбыҙҙы алға ҡуйҙыҡ. Икенсенән, "Киске Өфө" ниндәйҙер гәзиттең күсермәһе йәки Өфөлә барған хәл-ваҡиғалар тураһында ғына мәғлүмәт биреүсе баҫма түгел икәнен раҫлап, уның "Башҡорт донъяһы" тигән йүнәлешен билдәләнек. Өфөбөҙҙәге башҡорт донъяһы - дөйөм башҡорт донъяһының сағылышы бит инде ул. Ә "Киске Өфө" ошо бер бөтөндө тоташтырыусы күпер һымаҡ булырға тейеш ине. Бына, мәҫәлән, Өфөбөҙҙәге берәй башҡорт ғаиләһен яҙабыҙ икән, уның йәшәү рәүеше өлгөһө, балалар тәрбиәләүе, йолалары, һәр даим аралашыуҙары - барыһы ла шул уҡ ауылда йәшәүсе милләттәштәребеҙ көнитмешенә бер тамсы һыуҙай оҡшаш. Был оҡшашлыҡты Өфөлә йәшәүсе ғаилә ағзаларының тамырҙары шул уҡ ауылға барып тоташыуы ла көсәйтә һәм улар тураһында уҡып, яҡташтары, ауылдаштары ҡыуана. Икенселәр иһә ошо ғаилә миҫалында Өфөләге көнитмеш хәлдәре тураһында мәғлүмәт ала. Был да мөһим, сөнки, иртәме, һуңмы, уның балаһы, туғаны баш ҡалаға уҡырға киләсәк, төпләнеп ҡалыуы ла ихтимал. Тимәк, баҫмабыҙҙы бер нисек тә Өфө гәзите, тип кенә сикләй алмай инек. Ул ҙурыраҡ, мөһимерәк әһәмиәткә эйә булырға тейеш ине, сөнки ул беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы гәзите бит!



*"Беҙҙең гәзит!" - тиҙәр Салауат ҡалаһы уҡытыусылары.*

"Киске Өфө" үҙ уҡыусыларының бик күп һорауҙарына яуап та бирергә, рухын да күтәрергә, сәмләндерергә лә, танһығын да ҡандырырға тейеш ине. Был маҡсатты үтәүгә, әлбиттә, гәзитебеҙҙең баш ҡала гәзите тип нарыҡланыуы ла бик-бик ярҙам итте. Фәһем алыр, фекер әйтер, өлгө күрһәтер шәхестәр Өфөбөҙҙә бит! Халыҡтың рухын күтәрер һүҙҙе улар әйтмәй, кем әйтһен? Ауылда тыуып үҫеп, мең төрлө кәртәләр аша үтеп, баш ҡалала төпләнеп, дәрәжәләр яулаған милләттәштең шәхси фиҙәҡәрлеге, баһадирлығынан башҡа тағы нәмә һәм кем өлгө була ала беҙгә, балаларыбыҙға? Баш йорттоң башҡорт донъяһы тураһындағы хәбәрҙәрен "Киске Өфө" аша Башҡортостаныбыҙҙың бар ауыл-ҡасабаларына таратыуға өлгәштек шулай.

Беҙҙең ошо ун биш йыл эсендәге ижадты сиҙәм аҡтарыу менән сағыштырырға булыр ине. Яңы баҫма яңыса ижад итергә тейеш, тигән хәҡиҡәтте бик ныҡ һанлап, уны төп ҡағиҙәбеҙ итеп алып, матбуғат майҙанында үҙебеҙҙең ҡабатланмаҫ, үҙенсәлекле эҙебеҙҙе һалырға тырышыуыбыҙ бына. Шуныһын да әйтеп ҡуяйым: еңел мәғлүмәткә өйрәнгәндәр өсөн түгел беҙҙең баҫма. Теләһә ниндәй криминаль хәлдәр, ғәйбәттәр, имеш-мимеш хәбәрҙәр менән мауыҡҡандар өсөн дә түгел гәзитебеҙ. Аҡылын күңел төпкөлөнә йәшереп, ғәмен, дәртен ойотҡандар ҙа уҡый алмаҫ уны. Уйлана белгәндәр өсөн ул "Киске Өфө".

Нисек кенә булмаһын, Артур Миллер тигән бер аҡыллы кеше әйткән бурысты иңебеҙгә артмаҡлап алдыҡ. Ул шулай тигән: "Нимә ул яҡшы гәзит? Ул милләттең үҙ-үҙе менән һөйләшеүен ойоштора алған гәзит". Ун биш йыл буйы шуға ынтылабыҙ. Беләбеҙ, был ынтылыш әле... 110 проценты менән атҡарылып та бөтмәгәндер. 110 процентҡа эшләү генә камиллыҡты тәьмин итә, ти бит уңышлы кешеләр. Бәлки, беҙҙән һуң килгән быуын артылыр ул үргә. Һәр хәлдә, шул быуындың быуынын нығытырға ярҙам итергә тейеш гәзитебеҙ һүҙе, шәхестәребеҙ аҡылы. Ғөмүмән, халҡыбыҙға матбуғат һүҙе кәрәк икәненә инанғанбыҙ. Әҙип яҙған һүҙгә мөкиббән китеп ышаныу һаман йәшәй бит әле. Ошо ышанысты ҡаҡшатмаҫҡа ине ул, тип йәшәй ун биш йәшлек "Киске Өфө" гәзите.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА,**
**"Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Туймазы һәм Бүздәк районДарының бер нисә ауылында иғлан ителгән бешмә вирусы буйынса карантин тамамланды. Бешмә сире эҙемтәләрен бөтөрөү барышында 1,7 мең баш мал юҡ ителде, нигеҙҙә был эре малдар, кәзәләр һәм һарыҡтар. Шулай уҡ яҡынса 100 мең баш эре һәм ваҡ малға вакцина һалынды. Бөгөн Башҡортостанда халыҡҡа бешмә вирусы арҡаһында юҡ ителгән малдар өсөн компенсация түләү тамамлана. Дөйөм алғанда, уның өсөн 30 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән.

✓М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты 10 ноябрҙә көндөҙгө сәғәт 4-тә 213-сө аудиторияла ун беренсе класс уҡыусылары өсөн һынау йомғаҡлау иншаһы ойоштора. 273-38-81, 8-937-366-84-40 телефондары, kafedralit@gmail.com электрон почтаһы аша, Өфө ҡалаһы, Октябрь революцияһы урамы, 3/а, БДПУ-ның өсөнсө корпусы, 212-се аудиторияла яҙылырға мөмкин. Исем-шәрифенде, ҡайһы мәктәптә уҡыуыңды хәбәр итергә кәрәк.

✓Рәсәй Президенты өлөшләтә төҙөлөш тәжрибәһенән баш тартыу өсөн өс йыл ваҡыт бирҙе. 15 декабргә тиклем улар төҙөлөш өсөн банк аша кредитлау һәм башҡа финанслау формалары менән граждандарҙың аҡсаларын алмаштырыу буйынса планды раҫларға тейеш, тип билдәләнә документта. Йәғни, өс йылдан хәүеф-хәтәрҙе өлөшсөләр түгел, ә институттар үҙҙәре йөкләргә тейеш.

✓Силәбе өлкәһендә сусҡаларҙың Африка тағуны сире сәбәпле Башҡортостандың төньяк-көнсығышында һәм Учалы районында махсус постар ҡуйылған. Республиканың ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов хәбәр итеүенсә, республикалағы барлыҡ ҙур сусҡасылыҡ комплекстары ауырыу сығанағынан алыҫта урынлашҡан, һәм шуға күрә Башҡортостан биләмәһенә ошо хәүефле сир янамай. Ә шулай ҙа һаҡланыу саралары ойошторола.

✓Сираттағы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу 2020 йылдың 1-31 октябрендә уҙғарыла. Рәсәй Хөкүмәте ошо хаҡта бойороҡ ҡабул итте. Документта әйтелеүенсә, ойошторо у мәсьәләләрен эшкәртеү маҡсатында 2018 йылдың 1-31 октябрендә дөйөм халыҡ иҫәбен алыу ойошторола һәм 550 мең кешене үҙ эсенә ала. Бынан алдағы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу 2010 йылдың октябрендә үткәрелде. Унда 141 миллиондан ашыу кеше ҡатнашты.

**“Башинформ”дан.**

✓ **Беҙ ата-әсәләрҙең 85 проценты түгел, ә 100 процентының да башҡорт телен өйрәнеү яҡлы булыуын теләйбеҙ һәм быны өсөн нимә эшләргә кәрәклеге хаҡында уйланабыҙ...**



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# СИТТӘР ҘӘ ТАРТЫЛА

**Был көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов етәкселегендә Милләт-ара мөнәсәбәттәр комиссияһы ултырышы булып үтте. Унда ҡалабыҙҙың юғары уҡыу йорттарында белем алыусы сит ил граждандарын урындағы мөхиткә яраҡлаштырыу саралары тураһында һөйләшелде.**

Ултырышты асып, Сынтимер Биктимер улы Рәсәй мәғарифының донъя кимәленә сығыуын, шунлыҡтан сит ил йәштәренең беҙҙең мөхиткә ылығыуы темаһының йылдан-йыл көнүҙәк була барыуын билдәләне. "Өфө һымаҡ иҡтисади үҫешкән ҡалалар һәр ваҡыт мигранттар ағымын үҙенә йәлеп итеүсе ҡалалар иҫәбендә булды һәм буласаҡ. Ул граждандарҙың бындағы тормошкөнкүрешкә өйрәнеп китеүе милләт-ара мөнәсәбәттәрҙең ныҡлы булыуы тураһында ла һөйләй", - тип, алдағы сығыштарға инеш һүҙ әйтте Сынтимер Биктимер улы.

Артабан Өфөләге юғары уҡыу йорттары вәкилдәре сит ил студенттары менән эшләү асыулдары, тәжрибәһе менән уртаҡлашты. БДУ вәкиле Татьяна Великжанинаның сығышынан мәғлүм булыуынса, был уҡыу йортонда тел өйрәтеү теорияһы һәм методикаһы буйынса махсуслашҡан кафедра ла эшләй икән. Шунлыҡтан БДУ сит ил студенттарына рус телен өйрәтеү йүнәлешендә күп йыллыҡ тәжрибәгә эйә. Уҡыу йорто сит ил граждандарына рус теле буйынса белемен тикшереү дәүләт программаһы системаһына ла индерелгән. Ошо эш менән шөғөлләнгән махсус үҙәк тә бар бында. Был үҙәк белемде тикшереү менән дә, уны үҫтереү менән дә шөғөлләнгәнлектән, унда инде 3 меңдән ашыу кеше белем алған һәм 7 меңдән ашыу сит ил граждан төрлө кимәлдәге имтихандар тапшырып өлгөргән. Ағымдағы йылдың августында БДУ-ла мигранттарҙы ижтимағи-мәҙәни мөхиткә өйрәтеү үҙәге ойошторолған. Был үҙәктең маҡсаты - милләт-ара татыулыҡты һаҡлау һәм нығытыу, мигранттар менән урындағы халыҡ араһында ихтирамлы мөнәсәбәттәр тәрбиәләү.

Татьяна Великжанина мәктәптәрҙәге хәлдәргә лә туҡталды. Атап әйткәндә, ул мигрант балаларының телде белмәүе сәбәпле уҡыу процесында өлгәшә алмауы, уҡытыусыларҙың ошо балалар кимәлен иҫәпкә алып эшләргә мәжбүр булыуы, шунлыҡтан беҙҙең ватандаштар балалары менән сит ил граждандары балалары араһында психологик кәртә барлыҡҡа килеүе менән бәйле мәсьәләләрҙең киҫкен тороуы тураһында һөйләне. "Был мәсьәләләр комплекслы саралар талап итә", - тине ул һәм был хәлдән сығыу юлдарының береһе тип үҙе төҙөгән программа тураһында әйтеп үтте. Мигрант балаларының урындағы мәҙәни мөхиткә, уҡытыу процесына тиҙ арала ылығыуына булышлыҡ итеүгә йүнәлтелгән был программа РФ Мәғариф һәм фән министрлығында яҡлау тапҡан, ошо министрлыҡтың грантына лайыҡ булған.

Иҙел РӘХИМОВ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# МАТДИ ЯРҘАМ



**Башҡортостан биләмәһендә йәшәүсе халыҡтарҙың туған телдәрен яҡлауға һәм үҫтереүгә бер нисә йөҙ миллион һум йүнәлтеләсәк. Ошондай һандарҙы килтерҙе төбәк етәксеһе Рөстәм Хәмитов Милләт-ара берҙәмлекте һәм татыулыҡты нығытыуға булышлыҡ итеү мәсьәләләе буйынса Советтың һәм Республика халыҡтары ассамблеяһы советының берлектәге ултырышында.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, сентябрҙә Рәсәй Федерацияһы Президентының йөкләмәләрен бойомға ашырыу өсөн Рөстәм Хәмитов дәүләт телдәрен һәм республика халыҡтары телдәрен үҫтереү буйынса саралар тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Документ өс төп йүнәлеш буйынса эште күҙаллай: Башҡортостандың дәүләт телдәрен һәм ундағы халыҡтарҙың телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса дәүләт программаһын; республиканың дәүләт телдәрен һәм ундағы халыҡтарҙың телдәрен һаҡлауға, пропагандалауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн йыллыҡ республика Башлығы гранттарын әҙерләү; шулай уҡ башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса фонд ойоштороу. Рөстәм Хәмитов билдәләүенсә, өс йүнәлештең һәр ҡайһыһы етди рәүештә финансланасаҡ. Мәҫәлән, республика Башлығы гранттары - кәмендә 50 миллион һум, Фондтың башланғыс суммаһы ғына яҡынса 50 миллион һум буласаҡ. Дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса программа 100 миллион һумдан артасаҡ.

# ХАЛЫҠ РӘХМӘТЛЕ...



**Рәсәйҙә тормош сифатын баһалау проекты сиктәрендә РФ Хөкүмәте эргәһендәге Финанс университеты илдең эре һәм уртаса ҡалаларында торлаҡ-коммуналь хужалығы торошона ҡарата ҡулланыусыларҙың фекерен өйрәнде. Тикшеренеүҙәр ағымдағы йылдың йәй-көҙ айҙарында барҙы.**

Һәр ҡалала һорауҙарға 600-ҙән ашыу респондент яуап биргән. Һорауҙар башлыса ҡала мөхите һәм торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр эшенә ҡағылған. Бынан тыш, ҡалала торлаҡ төҙөлөшө күләме менән ризаһығыҙмы, ҡала йәшәү өсөн уңайлымы, тигән һорауҙар бирелгән.

Торлаҡ-коммуналь хужалығы торошон баһалау индексы буйынса Өфө, Мәскәү, Екатеринбург, Новосибирск, Пермь, Дондағы Ростов кеүек ҡалаларҙы үтеп китеп, халыҡтың юғары баһаһына өлгәшкән 10 ҡала исемлегенә ингән. Өфөләрҙең 87 проценты ҡаланы йәшәү өсөн уңайлы тип иҫәпләй, респонденттарҙың 94 проценты торлаҡ етерлек кимәлдә төҙөлә, тип яуап биргән. Үҙенең йәшәгән йортонан ҡәнәғәт булыусылар 64 процент тәшкил иткән, торлаҡ-коммуналь хужалығы эшенең сифатын юғары баһалаусылар һаны - 60 процент.

# БӘЙЛӘНЕШ НЫҒЫНА



**Һуңғы ике йылда Өфө ҡала округы хакимиәте тышҡы иҡтисади эшмәкәрлекте әүҙемләштерҙе. Был йүнәлеш буйынса ошо ваҡыт эсендә делегациялар менән 75 осрашыу, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренә - 30, сит илдәргә 15-тән ашыу эшлекле сәфәр ойошторолған. Был турала оператив кәңәшмәлә Өфө ҡала хакимиәтенең инвестициялар идаралығы етәксеһе Марс Әминев белдерҙе.**

Быйыл сит илдә - 5, Рәсәй төбәктәрендә 9 эшлекле осрашыу үткән. Шулай уҡ Өфө Швейцария, Чехия, Ҡытай, Төркиә, Ҡырғыҙстан, Рәсәйҙең эре ҡалаларынан 19 тапҡыр рәсми делегация ҡабул иткән. Таможня мәғлүмәттәренә ярашлы, йылдың тәүге яртыһында баш ҡала донъяның 83 иле, ә 2016 йылдың һөҙөмтәләре буйынса донъяның 94 иле менән иҡтисади бәйләнеш булдырған. Марс Мирсәйет улы билдәләүенсә, экспортта контрагент илдәр исемлегенә Латвия, Ҡытай, Нидерландтар, ә импортта Ҡытай, Германия, Ирландия ингән. Ярты йыл эсендә был илдәр менән тышҡы сауҙа бәйләнеше күләме 939,2 млн доллар, ә 2016 йылда яҡынса 4 млрд доллар тәшкил иткән. Дәүләт статистикаһы мәғлүмәттәренә ярашлы, ҡала территорияһында сит ил капиталы ҡатнашлығында эшмәкәрлек алып барған 700-ҙән ашыу предприятие бар. Төбәк-ара һәм халыҡ-ара масштабта ла ҡаланың имиджы ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе. Аҙаҡҡы ике йылда хакимиәт вәкилдәре 12 халыҡ-ара сарала ҡатнашты. Баш ҡалала халыҡ-ара кимәлдәге саралар күп үтә, 1997 йылдан алып Өфө 15 сит ил муниципалитеты менән хеҙмәттәшлек итеүгә ҡул ҡуйған. Өфө 1998 йылдан алып Халыҡ-ара баш ҡалалар һәм эре ҡалалар Ассамблеяһының ағзаһы булып тора. Былтыр Ассоциацияның XXIV сессияһында Ирек Ялалов уның президенты итеп һайланды. 20 йыл буйына Өфө ЮНЕСКО линияһы буйынса күп кенә әһәмиәтле проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа ҡатнаша. Быйыл Ирек Ишмөхәмәт улы Рәсәй ҡалалары берлегенең ассоциациялы вице-президенты итеп һайланды. Һуңғы 5 йылда Өфө төбәк-ара, халыҡ-ара хеҙмәттәшлек, тышҡы иҡтисади бәйләнештәр йүнәлешендә алға китте. "Хәҙер Ҡытайҙың туғанлашҡан ҡалаларына, уртаҡ предприятиелар төҙөүгә иғтибар йүнәлтеү кәрәк", - тине ултырышты йомғаҡлап Ирек Ялалов.

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН ӨЙРӘНӘСӘКБЕҘ!



**"Ор Авнер" йәһүд мәктәбе уҡыусылары ата-әсәләренең 90 проценттан ашыуы башҡорт телен өйрәнеү яҡлы.**

Ошо хаҡта Башҡортостандың һәм Өфөнөң баш раввины Дан Кричевский Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы милләт-ара татыулыҡты һәм тыныслыҡты нығытыуға булышлыҡ итеү мәсьәләләре буйынса Советтың һәм Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы советының берлектәге ултырышында белдерҙе.

- Мәктәптә йәһүд (24 процент), рус (8 процент), татар (24 процент), башҡорт (10 процент) һәм башҡа милләт вәкилдәре белем ала, - тине ул. - Бер нисә тиҫтә йыл элек кенә беҙ бер өҫтәл артына йыйылып, балаларға, дингә ҡағылышлы мөһим мәсьәләләрҙе хәл итербеҙ тип уйлай ҙа алмай инек. Донъялағы хәлдәрҙе күреп-аңлап торабыҙ һәм Рәсәйҙең милли йолаларҙы үтәү мөмкин булған ышаныслы урын икәнлегенә төшөнәбеҙ. Милләт-ара һәм конфессия-ара мөнәсәбәттәрҙе тикшереү республикала йәшәүселәрҙең күпселеге - 85 проценттан ашыуы - уларҙы ыңғай баһалауын күрһәтә. Беҙ ата-әсәләрҙең 85 проценты түгел, ә 100 процентының да башҡорт телен өйрәнеү яҡлы булыуын теләйбеҙ һәм быны өсөн нимә эшләргә кәрәклеге хаҡында уйланабыҙ...

Баш раввин әйтеүенсә, конфессия вәкилдәре дәүләт телдәренән тыш, Башҡортостанда туған телдәрҙе өйрәнеү өсөн мөмкинлек булдырылыуына ла рәхмәтле. Шуға күрә улар республикабыҙҙа тормош яҡшыраҡ булһын өсөн эшләргә әҙер. Дан Кричевский Тора китабынан әҙәк килтерҙе, унда исемдәрҙе, телде һәм мәҙәниәтте һаҡларға кәрәк, һәм шул саҡта халыҡ йәшәйәсәк, тиелә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың Квалификациялы судьялар коллегияһы Өфөлә һәм республикала судья вакансияларының асылыуы хаҡында хәбәр итте. Атап әйткәндә, БР Юғары судына, Өфө ҡалаһы Киров районына, Бөрө район-ара судына - судьялар, Өфөнөң Калинин районы буйынса 5-се, Өфө районы буйынса 1-се суд участкаларына - мировой судьялар, Бәләбәйҙә ҡала суды рәйесе талап ителә. Документтар 24 ноябргәсә ҡабул ителә.

✓Өфөлә етем һәм ата-әсә ҡарауынан ҡалған балалар, шулай уҡ инвалидтар һәм инвалид балалары булған ғаиләләр Кузнецов Затоны биҫтәһендә урынлашҡан яңы торлаҡ комплексынан фатир алды. Әлеге торлаҡ комплексындағы 148 фатирҙың 30-ы халыҡтың ошо категорияһына бирелгән. Йорттағы башҡа фатирҙарҙы социаль торлаҡ алыуға хоҡуғы булған граждандар һатып алған. Комплекс ике ҡатлы төкәтмә менән 14 ҡатлы кирбес йорттан тора.

✓Башҡортостанда ер участкаларына һәм капиталь төҙөлөш объекттарына күләмле инвентаризация үткәреү башланды. Республикала "Росреестр" мәғлүмәттәрен сағыштырыу һәм аныҡлау өсөн күсмә тикшереүҙәр старт алды. Был ҡаҙнаны тулыландырыу өсөн кәрәк. Һалым хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, күсемһеҙ милек объекттарының 20-40 процентҡа тиклеме иҫәпкә алынмаған, һәм шуға ярашлы улар өсөн һалым түләнмәй.

✓Башстат хәбәр итеүенсә, быйыл ғинуарҙан сентябргә тиклем республикала 22 313 никах теркәлгән, 36 963 сабый донъяға килгән. 2016 йылдың ошо уҡ осоронда иһә 20 207 ғаилә ҡоролған, 42 580 бала тыуған.19 муниципаль районда тыуымдың артыуы билдәләнгән. Башҡортостан халҡы 753 кешегә кәмегән.

✓Башҡортостанстат белгестәре республикала үлем статистикаһын баҫып сығарҙы. 2016 йылда 52 283 кеше вафат булған, 55 708 сабый донъяға килгән. Башҡортостанда үлем сәбәптәре араһында беренсе урынды ҡан әйләнеше системаһы ауырыуҙары (41,1 процент) биләй. Икенсе урында - онкология (13 процент), өсөнсөлә - тышҡы сәбәптәр (8,1 процент).

✓Башҡортостан ағымдағы йылдың 1 октябренә федераль дәүләт программаларын тормошҡа ашырыуға 42 миллиард һум аҡса алды. Был сумма былтырғынан 4,9 миллиард һумға күберәк (артым 13,2 процент).

*✔ Үҙ уҡыусыһының һүҙен ишетергә, тыңларға теләгән һәм уны киң аудиторияға сығарырға булышлыҡ иткән баҫма һәр ваҡытта ла халыҡ гәзите булып ҡаласаҡ.*



АФАРИН!

# ҒАИЛӘЛӘР ТАНТАНАҺЫ





**Үткән аҙна аҙаҡтарында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Инга Юмашева, ҡаланың район хакимиәттәре башлыҡтары, жюри ағзалары һәм башҡалар ҡатнашлығында "Йәш ғаилә-2017" конкурсының ҡала этабында еңеүселәрҙе тәбрикләнеләр.**

Тантананы асып, Ирек Ишмөхәмәт улы йылдар һуҙымында үткәрелә килгән был конкурстың маҡсаты үҙгәрешһеҙ ҡалыуын, йәғни уның йәмғиәттә ғаилә институтының әһәмиәтен һәм дәрәжәһен үҫтереүгә, ижтимағи яуаплы, сәләмәт тормош алып барған, үҙҙәренең ҡыҙыҡһыныуҙарын һәм таланттарын үҫтергән, урындағы йәмәғәт тормошонда, төбәк тормошонда, ил тормошонда әүҙем ҡатнашҡан ғаиләләрҙе ишәйтеүгә һәм арттырыуға йүнәлтелеүен билдәләне.

Ҡала башлығының сығышынан билдәле булыуынса, быйылғы "Йәш ғаилә" ҡала конкурсы алдағыларынан формаһы яғынан айырылып торған. Быға тиклемге конкурстарҙа конкурсанттар бер майҙанда сиратлап һынау тотһа, үҙҙәренең һөнәрҙәрен һәм оҫталыҡтарын күрһәтһә, был юлы улар бер юлы төрлө майҙансыҡтарҙа, замансалап әйткәндә, "квестар"ҙы үтергә тейеш булған. Сити-менеджер конкурстарҙың был формаһы заманса һәм уңайлы булыуын, киң таралыу алыуын да билдәләне.

Еңеүҙәргә ете төрлө һынау үтеп килгән конкурста ҡатнашыусылар. Улар аш-һыу оҫталығында ла, ГТО нормаларын тапшырыуҙа ла, отҡорлоҡто, ижади һәләтлекте һынаған викториналарҙа ла, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылына арналған мода күрһәтеүҙә лә ярышҡан. Һөҙөмтә - күҙ алдында: гран-при Орджоникидзе районынан Юлиана һәм Илмир Ғәниевтар ғаиләһенә бирелде, улар Өфө данын республика конкурсында яҡлаясаҡ. Ете номинацияла ете еңеүсе билдәләнде. Бына улар: "Романтизм һәм ғаилә гармонияһы өсөн" номинацияһында Ҡалҡамановтар, "Етеҙлек һәм оригиналлек өсөн" - Ғиләжевтар, "Ғаилә традицияларына тоғролоҡ өсөн" - Нуртдиновтар, "Креативлыҡ һәм заманса ҡараш өсөн"- Нагаевтар, "Ҡабатланмаҫлыҡ һәм үҙенсәлеклелек өсөн" - Ғәниевтар, "Спорт рухлы булыуҙары өсөн" - Салауатовтар, "Артистизм һәм ижади ҡараш өсөн" - Азановтар еңеүсе тип билдәләнде. Бөтә ҡатнашыусылар көнкүреш һәм компьютер техникаһы сертификаттары менән бүләкләнде. Бынан тыш, "Башкирия" Lifestyle үҙәге Нуртдиновтарға, ә республиканың ГТО тикшереү үҙәге Салауатовтарға махсус призларын тапшырҙы.

Октябрь районынан Гөлфинә һәм Илнар Салауатовтар был конкурста дүртәүләп: ҡыҙҙары Илсиә (6 йәш) һәм улдары Илдан (3 йәш) менән ҡатнашҡан. Ғаилә башлығы әйтеүенсә, Салауатовтар ярыштарға, конкурстарға өйрәнеп тә бөткән. "Йәш ғаилә" конкурсында беренсе тапҡыр ҡатнаштыҡ. "Атай, әсәй һәм мин - спортсы ғаилә" конкурстарында еңгәнебеҙ булды. Былтыр ҡыш айҙарында йәш ғаиләләр араһында уҙғарылған саңғы ярыштарында ла беренселекте бирмәнек", - тине ғаилә башлығы. Уның һүҙҙәрен хужабикә: "Илдан улыбыҙ бәләкәсерәк әле, уның барыһы ла алда. Ә Илсиәбеҙ, бәләкәй булыуына ҡарамаҫтан, "Һаумы, һаумы, әкиәт" конкурсының ҡала этабында 3 йәше тулыр-тулмаҫтан ҡатнашты, ул шулай уҡ "Мисс супер детка Башкортостана" конкурсында гран-при яуланы", - тип, балаларының тәүге уңыштары тураһында һөйләп үтте. Бөгөнгө конкурста уларҙың спорт буйынса иң яҡшы ғаилә тип табылыуы тураһында әйткәйнек инде. Тағы ошо конкурс сиктәрендә үткәрелгән интернет тауыш биреүҙә лә Салауатовтарға етеүсе булмауын да билдәләге килә. Ни тиһәң дә, бөтөн яҡтан да килгән ғаилә шул Салауатовтар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илнар Салауатов ГТО нормативын 5 ярым тапҡырға арттырып үтәгән. Конкурстағы спорт ярыштарын ул: "Ҡыйын булманы, күнекмә һымаҡ ҡына булды", - тип баһаланы. Ошо урында уның Бөрйән районы Байназар ауылында тыуып үҫкән, БДУ-ның Сибай институтында уҡып, көрәш буйынса Рәсәй, республика турнирҙарында сыныҡыу үткән көрәшсе икәнен дә әйтеп үтмәү мөмкин түгел. Ошондай атайҙар Гөлфинәләй уңған ҡатынға тап булһа, уларҙың ғаиләһе мотлаҡ Илсиә, Илдан һымаҡ талантлы балалар тәрбиәләйҙәр инде ул...**

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ҺӘР КЕМ УҠЫРЛЫҠ...

**Атайымдың киске ашҡа йыйылған ваҡытта, әсәй өҫтәл әҙерләгәнсе, ҡыштырлатып гәзит уҡып ултырғаны бала саҡтың яҡты хәтирәһе булып иҫтә ҡалған. Үҙенең уҡығанын аңлайышлы ғына итеп беҙгә еткерер ҙә, фекеребеҙҙе тыңлап, һығымта эшләп ҡуйыр ине. Унан күрмәксе, беҙ ҙә гәзит-журналдар уҡырға яраттыҡ һәм әле лә ваҡытлы матбуғаттан айырылғаныбыҙ юҡ. Ағай-апайҙарым да, мин дә өйөбөҙгә күпләп гәзит-журналдар алдырабыҙ.**

Ваҡытлы матбуғат саралары мәғлүмәти сығанаҡ ҡына түгел, миненсә. Һәр яңы һанды ҡараштырып ҡына сығыу ҙа зиһенгә ял бирә. Ә бөтә булмышыңды биреп, һәр яҙылғанды тәфсирләп уҡыу, әлегәсә уйыңа ла инеп сыҡмаған күп төрлө фекерҙәр тыуҙырыуға булышлыҡ итә. Ғөмүмән, һәр гәзит-журнал биттәрендә кешене уйландырырлыҡ, ҡанатландырырлыҡ, рухландырырлыҡ, дәртләндерерлек, өмөт уятырлыҡ мәҡәләләргә өҫтөнлөклө урын биреү мөһим. "Киске Өфө" нәҡ ошо һыҙаттары менән күпселек баҫмаларҙан юғары тора. Гәзиттең тағы бер үҙенсәлеге - ул үҙ уҡыусыһы менән күҙгә күренмәгән бәйләнеш булдырыуға өлгәшкән. "Киске Өфө" ниндәйҙер сара тураһында яҙһа - үҙеңде шул тамаша уртаһында булғандай хис итәһең, берәй мәҡәлә геройы хаҡында уҡыйһың да, уны күптән белгән таныш кеше кеүек итеп ҡабул итәһең. Шулай уҡ баҫманың төрлө өлкәгә ҡағылышлы мәҡәләләр буйынса фекер алышырға саҡырыуы ла ҙур баһаға лайыҡ. Үҙ уҡыусыһының һүҙен ишетергә, тыңларға теләгән һәм уны киң аудиторияға сығарырға булышлыҡ иткән баҫма һәр ваҡытта ла халыҡ гәзите булып ҡаласаҡ.

"Киске Өфө"нөң тарихҡа ҙур иғтибар биреүе лә күңелемә яҡын. Ә тарихи мәғлүмәтте йәш ғалимдар ауыҙынан ишетеү, уларҙың фекерен белеү бигерәк тә яҡшы, сөнки үткәнен өйрәнгән, таныған, һанлаған йәштәр булғанда, киләсәгебеҙ ҙә ышаныслы.

Хәҙер төрлө сирҙәр ҙә ҡотора. Рәсми медицина ни тиклем генә үҫешмәһен, халыҡ дауаһы ла ситтә ҡалмай. Гәзиттә даими бирелеп барған "Шифа" битендәге халыҡ дауаларын ҡалдырмай уҡыйым, үҙемә кәрәклеләрен яҙып алам, ҡулланам. Бик тә файҙалы һәм кәрәкле тема.

Гәзиттәге мәҡәлә ҡоро мәғлүмәти сығанаҡ ҡына була алмай. Ундай мәҡәләне бер кем дә аҙағына тиклем уҡып бөтмәйәсәк. Ниндәй мәғлүмәтте лә матур, тулы һәм шул уҡ ваҡытта ялҡытмаҫлыҡ итеп бирә белгәндә генә уҡымлы гәзит сығарырға мөмкин. "Киске Өфө" үҙ уҡыусыһының иғтибарын әләктереп алырлыҡ һәм уны һүрелтмәҫлек мәҡәләләр баҫтырыуы менән дә отошло баҫма булып тора. "Заман башҡорто", "Әйт, тиһәгеҙ", "Сәләмәтлек әлифбаһы" бер тынала уҡып сығырлыҡ ифрат шәп рубрикалар.

Гәзиттең юбилейы айҡанлы баҫмаға тик изге теләктәремде юллайым. Халыҡ, тел мәнфәғәтенә битараф булмағаны, олоһона ла, кесеһенә лә берҙәй тигеҙ иғтибар бүлгәне өсөн рәхмәт һүҙҙәремде еткерәм.

**Шәүрә ЙЫЛҠЫБАЕВА.**

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Иммунитет нығытыу

❖ 2 лимондың тышын ҡырғыста ҡырырға, 200 грамм шәкәр ҡушып болғатырға. 4 лимондың һутын һығырға, шәкәрҙе ҡушып, болғатырға. 4 йомортҡаны сәнске менән күпертмәй генә туҡырға, һутҡа өҫтәргә һәм ярты сәғәткә ултыртып торорға. Һөҙөргә һәм кәстрүлгә ҡойорға, 40 грамм аҡ май өҫтәргә, талғын утта 3-5 минут ҡуйырғансы ҡайнатырға. Һыуытырға һәм һыуытҡысҡа ҡуйырға. Лимондың ҡабығында С витамины күп, ул капиллярҙарҙың торошон яҡшырта. Лимон бауыр эшен көйләй, йомортҡала холин бар, ул шулай уҡ бауырға файҙалы. Аҡ майҙа А витамины күп. Был лимонлы майҙы вирустар әүҙемләшкән мәлдә ҡулланыу тағы ла яҡшы.

❖ Көҙ-ҡышын һалҡын тейҙереп ауырыу көсәйә. Был ябай ғына ысул сирҙәрҙән һаҡлаясаҡ. 1 стакан йылы һыуҙа 1 балғалаҡ тоҙ иретергә һәм ошо һыу менән сиратлап танау ҡыуышлығын сайырға. Көн һайын ҡабатларға.

### Ҡарабойҙай

❖ Ҡарабойҙай төнәтмәһе ҡан тамырҙарын нығыта, иммунитетты нығыта, организмды шлактарҙан таҙарта. Ҡарабойҙай сәскәләре һәм ваҡланған һаламын бер тигеҙ күләмдә алып болғатырға, 1 балғалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һыуынғас, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 40-ар мл (балаларға - 20-шәр мл) эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә. Дауаланыу курсы - 1 ай. 3 аҙна ял иткәндән һуң, 3 ай буйына араларында 3-әр аҙна ял ойоштороп, 21-әр көн дауаланырға. 90 көндән тағы ҡабатларға.

### Йүткереү

❖ Йүткереүҙе баҫыу, бронхит, трахеитты дауалау өсөн айва ҡулланығыҙ. Ярты литр йылымыс һыуға 5-10 грамм айва орлоғон һалып, масса ҡуйыра башлағансы һелкетергә. 30 минут төнәткәс, төменсә бал өҫтәргә һәм сәй итеп эсергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр, ашар алдынан хәлегеҙ яҡшырғансы эсегеҙ.

❖ Йүткереүҙе банан дауалай. 2 ныҡ бешкән бананды эмаль һауытта иҙеп, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, болғатырға һәм бер аҙ талғын утҡа ҡуйып йылытырға. Бал өҫтәргә һәм йотомлап эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Мәҙинә ҡалаһына нигеҙ һалыу

Мөһәжирҙәр Мәҙинәлә бик ярлы йәшәй. Сөнки улар Мәккәләге бар донъяһын ташлап киткән була. Мәҙинәлә иһә аҡса эшләү мөмкинлеге булмай, шуға ла уларға үҙҙәре менән алып килгән мөлкәтте сарыф итергә тура килә. Хатта иң аҙ түләнгән эштәр ҙә мөһәжирҙәргә һирәк эләгә. Бында Мәҙинә халҡын ғәйепләп тә булмай - оазиста йәшәүселәргә лә үҙ ғаиләләрен туйҙырырға кәрәк була бит. Ҡасандыр Мәккәнең иң бай кешеләренән һаналған Әбү Бәкерҙең байлығынан да үндан бер өлөшө генә тороп ҡала.

Мөһәжирҙәр Ислам диненең бик ҡеүәтле һәм аяуһыҙ көсөнә әйләнә, сөнки улар өсөн Мәккәгә ҡайтыуҙың бер генә юлы тороп ҡала - Ислам тәғлимәтенең еңеүе. Бер нәмәһеҙ тороп ҡалғас, улар өсөн башҡаса юғалтырлыҡ нәмә ҡалмай. Аҙаҡҡы ышаныстары, берҙән-бер өмөттәре Мөхәммәт бәйғәмбәр була. Мәккәгә кире ҡайтыу теләге, тыуған ҡалаларын һағыныу тойғоһо мөһәжирҙәрҙе берләштерә, туплай.

- Был осорҙа аҙналар буйы тик икмәк һәм финик менән генә туҡланған ваҡыттар ҙа булды, икмәк бөтөп, бер ни ашамай үткәргән көндәр ҙә булғыланы, - тип һөйләй торған булған Ғәйшә, күп йылдар үткәс. - Бешерергә нәмә булмағас, хатта усаҡ та яҡмай торғайныҡ.

Мәҙинә халҡының холоҡ-фиғеле лә патриархаль тәрбиә алған Мәккә кешеләренә оҡшап етмәй. Мәҙинә ҡатын-ҡыҙҙарының үҙҙәрен иркен тотоуын улар әҙәпһеҙлек һанай һәм, ҡатындары менән ҡыҙҙарына кире йоғонто яһамаһын өсөн, уларҙы урындағы ҡатын-ҡыҙҙар менән аралаштырмаҫҡа тырышалар. Буйҙаҡ егеттәр ҙә урындағы ҡыҙҙар менән ғаилә ҡормай.

Мөхәммәт бәйғәмбәр былярҙың барыһын да күрә, борсола.

- Аллам! Йөрәктәребеҙгә Мәҙинәгә ҡарата һөйөү ебәр! Беҙ был оазисты Мәккәне яратҡан кеүек, хатта унан да артығыраҡ яратайыҡ! - тип ялбара ул доғаларында.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең был һүҙҙәрен башҡа мөһәжирҙәр ҙә ҡабатлай, тик бындай доғаларҙан һуң да Мәккәгә булған һағыныу тойғоһо кәмемәй...

## Монафиҡтарҙың аҫтыртын эше

Мөхәммәт бәйғәмбәр мөһәжирҙәр менән ансарҙар араһындағы мөнәсәбәттәрҙең һалҡынлығын бөтөрөү өсөн Исламдың берҙәм өммәте тураһында вәғәздәр алып бара. Өгөт-нәсихәт менән генә сикләнмәйенсә, байтаҡ ғаиләләрҙе бер-береһе менән туғанлаштыра. Әйтергә кәрәк, туғанлашыу йолаһын башҡарған кешеләр бер-береһенә ҡарындаш туған кеүек яҡын һаналған һәм туғанлыҡтың бындай төрө менән дә барыһы ла иҫәпләшергә мәжбүр булған.

Үҙҙәре менән туғанлашҡан мөһәжирҙәрҙе ансарҙар өйҙәрендә йәшәтә башлай. Ләкин быны менән генә хәйерселек кимәленә төшкән мөһәжирҙәрҙең проблемаһы тулыһынса хәл ителмәй әле.

Мосолмандар, ярлы йәшәүенә ҡарамаҫтан, Ислам диненә көскән ҡолдарҙы һатып алып, ирекке ебәреү өсөн һуңғы аҡсаларын да йәлләмәй. Ул ғына ла түгел. Мәҫәлән, Сәлмән әл-Фәриси исемле ҡол мосолман динен ҡабул иткәс, Мөхәммәт бәйғәмбәр өммәте тиҙ генә аҡса йыя ла, ҡолдоң хужаһына тоттора. Ләкин ул, Сәлмәнгә йөкмәтелгән эш башҡарылып бөтмәйенсә, уны ирекке ебәреүҙән баш тарта. Сәлмәнгә иһә байтаҡ ҡына финик ағастары ултыртырға ҡушылған була. Шул саҡ Мөхәммәт бәйғәмбәр башҡа мосолмандар менән бергә, ҡулдарына көрәк алып, ағастарҙы бер көн эсендә ултыртып сыға. Сәлмән ирекке ебәрелә. Тик ул ҡайтып китмәй, ә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тоғро юлдашына әйләнә.

(Дауамы бар).

КӨНҮҘӘК ТЕМАҒА

# СӘБӘП ЭҘЛӘМӘЙЕК,

## мөмкинлектәр табайыҡ

**Проблемалар бер көндә генә барлыҡҡа килмәй, улар яйлап өйөлә-өйөлә лә, ҡапыл килеп башты ла ҡалҡытмаҫлыҡ итеп баҫып китә. Әлеге ваҡытта тотош Рәсәйҙә милли субъекттар алдында торған туған телдәрҙе һәм республикаларҙың дәүләт телдәрен уҡытыу мәсьәләһе буйынса сетерекле хәл дә Путин әйтте лә, ҡапыл килеп тыуҙы түгел. Быға йылдар буйына яйлап киленде. Ошо көн килеренә ишаралаусы ваҡиғалар ҙа булды, әммә проблема үҙебеҙгә килеп ҡағылмай тороп, күпселек уға иғтибар итергә теләмәне, иғтибар иткәндә лә, күҙ йомоп ҡалыуҙы хуп күрҙе. Эйе, бөгөн проблема бар һәм уны хәл итеү юлдарын эҙләргә кәрәк. Варианттарҙың береһе булып, беҙҙең ҡарашҡа, башҡорт телен уҡытыуҙың яңы методикаһы һәм яңы дәреслектәр тора. Ошо хаҡта "Хәрефтәр донъяһында" әлифба китабының авторы, хаҡлы ялдағы уҡытыусы Лилиә МУСИНА менән әңгәмәләшәбеҙ.**




**➔ Беҙҙең республикала ла Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарына ярашлы башҡорт теле дәреслектәре менән тәьмин итеү тейешенсә атҡарылмауы асыҡланды. Уҡытыусы-практик булараҡ, был сетерекле мәсьәләнең барлыҡҡа килеү сәбәптәре буйынса һеҙҙең үҙ яуабығыҙ барҙыр, моғайын?**

- Был проблеманы мин бынан 20 йыл элек уҡ күреп, белеп йөрөнөм. 1984 йылда уҡ рус мәктәбендә башҡорт телен уҡыта башлағайным. 90-сы йылдарҙа рус мәктәптәре өсөн махсус башҡорт теле дәреслектәре сығара башланылар, ләкин улар үҙләштереү өсөн арыу уҡ ҡатмарлы булды. Бының сәбәбе шул: был дәреслектәрҙе яҙыуҙа практик уҡытыусылар ҡатнашмағайны.

**➔ Әммә ошо йылдар дауамында ни өсөн заман талаптарына ярашлы башҡорт теле методикаһы булдырыу хәстәрлеге күрелмәгән?**

- Бында төп сәбәп уларҙың юҡлығында түгел, ә ул методикаларҙы ғәмәлгә индереү юлындағы төрлө яһалма ҡатмарлыҡтарҙа. Мәҫәлән, мин үҙемдең китабымды һәм методикамды әҙерләү барышында дәреслектең ниндәй булырға тейешлеген, иң тәүге сиратта ниндәй хәрефтәрҙе өйрәнеү һәйбәтерәк булыуын күҙалланым. Ошо тәңгәлдәге һораүҙарға яуаптар эҙләнем. Миҫалдар килтерҙем. Шунан һуң яҙғандарымды анализлап, дәрестең үҙеген асыҡланым. Шунан тоттом да: "Нинә беҙҙең, уҡытыусы-практиктарҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалырға теләмәгән авторҙарға ялыныл йөрөйөм, үҙем дәреслек яҙайым әле", - тип, эш башланым. Ҡулъяҙмамды дәрескә алып килэм, балалар менән эшләйем, үҙем үк етешһеҙлектәрҙе асыҡлайым. Тәүҙә хәрефтәрҙе төрлө йомаҡтар, мәҡәлдәр, шиғырҙар ярҙамында аңлатырға маташҡайным. Камиллаша торғас, уларҙың рус балалары өсөн ауыр булыуын төшөнөп ҡалдым. Шунан хәрефтәр өйрәнгәндә ҡулайлы текстарҙы әкиәттәрҙән алырға булдым. Сөнки әкиәттәр менән эшләүе еңел. Балалар таныш әкиәтте ишетһә, ҡыуанып китә, булған ғына һүҙ запасын файҙаланып, уларҙы һөйләргә тырыша. Ысынында, бала бит мәктәпкә килгәнгә тиклем үк һөйләшә, фекерен матур итеп әйтә, аңлата белә, әммә мәктәптә уҡый башлағас, уның ошо һәләтлектәре һүрелә төшкән һымаҡ була. Эш ниҙә? Сөнки мәктәптә уның һөйләү һәләтлеген хәреф өйрәнеү кимәленә төшөрәбеҙ, уның телмәрен ваҡ өлөштәргә бүләбеҙ. Шуға ла мин хәреф өйрәнгәндә балаларҙың телмәрен үҫтереүгә иғтибар бирергә тырыштым. Шулай итеп, үҙгәрештәр индерә-индерә, уҡыу әсбабын "Әлифба" кимәленә еткерҙем.

**➔ Был китапты һеҙ үҙегеҙ уйлап тапҡан алым, үҙегеҙҙең методика, тип әйтә алаһығыҙ инде...**

- Эйе, ысынлап та был - мин уйлап тапҡан методика һәм ул әлегә башҡа халыҡтарҙа юҡ. В. Г. Горецкий яҙған "Русская азбука" ошо принциптарға яҡын килгән, әкиәт һүрәттәре лә бар, балаға тулы телмәр өйрәтер өсөн шиғри юлдар ҙа, уҡырға һүҙҙәр ҙә бар, ләкин унда бына ошо өс компонент бергә бәйләнмәгән. Шуға күрә минең методика әле бер халыҡта ла юҡ, тип әйтә алам. Әгәр беҙҙең белем биреү буйынса яуаплы ойошмалар һәм органдар ошоно аңлап, дәреслектең мөһимлеген һәм әһәмиәтен РФ Мәғариф министрлығы алдында иҫбатлай алһа, был беҙҙең башҡорт методикаһы булып донъя аңғыратыр ине.

**➔ Был әлифбағыҙ нисә сәғәткә иҫәпләнгән һәм уны нисә йыл уҡытырға була?**

- Элек мәктәптә дәрестәр һаны күп булғас, 102 дәрескә иҫәпләгәйнем. Ләкин уҡыта башлағас, программа буйынса 1 йылға ғына һыйманы, йыл ярымға етә ине. М. Кәрим исемендәге 158-се лицей асылған йылда (2006) минең әлифбам буйынса эшләнеләр, шунда Лилиә Ғилман ҡыҙы класымда рус балалары күберәк тип, уны ике йыл өйрәнергә булдым, тине. Шуға 120 сәғәткә һуҙырға булалыр тип уйлайым. Бер әкиәтте уҡытыусы минимум 3 дәрестә үтә, әммә баланың телде белеү кимәле түбән булһа, уны 4-5 дәрестә лә үтеүҙәре мөмкин. Әле башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы бер дәрескә генә ҡалдырғандар икән, улар был әлифбаны бер 3-4 йыл, йәғни башланғыс звенола уҡый ала. Сөнки китапта әкиәттәргә яҙылған йырҙар бар. Шуларҙы өйрәнергә мөмкин, Миндә инсценировкалар өлгөләре бар - шуларҙы ҡулланһалар, китапты тулыһынса ятлатып була. Ә был инде бала телмәрҙе генә түгел, әҙәби телдең бер өлөшөн дә өйрәнә башлаған тигән һүҙ.

**➔ Был китап электән булған, уны Мәғариф министрлығында ла белгәндәр, ни өсөн күпләп тиражлап таратыу һәм бөтә мәктәптәрҙә лә тәьмин итеү буйынса эш алып барылмаған? Сәбәбе нимәлә?**

- Дәреслектәр сығарыу өсөн мотлаҡ критерийҙар бар: автор кәмендә фән кандидаты һәм уның дәреслек сығарыу өсөн лицензияһы булырға тейеш. Ләкин бөгөн уҡыусылар менән эшләгән, проблемаларҙы күргән, уларға белем биреүҙә ниндәй алымдар ҡулланыу уңышлы булғанын аңлаған уҡытыусылар араһында фән кандидаттары һәм дәреслек сығарырға рөхсәте булғандар бармы икән? Тап ошо арҡала новатор уҡытыусыларҙың яңылығы киң даирәгә сыға алмай, баҫылып ҡала. Әгәр сығартырға теләһәң, ошо талаптарға тап килгән ниндәйҙер ғалим китаптың авторҙашы булырға тейеш. Әммә яңы методикаға нигеҙләнеп эшләнгән дәреслек - ул уны яҙыусының интеллектуаль милке һанала һәм уны нисек кемгәлер тотторол ебәрергә мөмкин?

**➔ Ғәҙәттә, уҡытыу системаһы нисек ҡуйылған - һәр кем үҙенең предметын иң кәрәклеһе тип күрһәтергә тырыша. Ә бына ошо "Әлифба"ла рәсем дәресе лә (һүрәт төшөрөү йәки буяу), йыр дәресе лә (йырҙар өйрәнеү), математика ла (әкиәт персонаждарын һанау), тирә-яҡ мөхитте өйрәнеү (ваҡиғалар тәбиғәттә бара) - барыһы ла бергә тупланған, тиергә мөмкин. Тимәк, башҡа дәрестәрҙә лә "Әлифба"ла өйрәнгәндәрҙе ҡабатларға була...**

- Хатта физкультура дәресендә лә, тиер инем. Сөнки әкиәт персонаждарының хәрәкәттәрен ҡабатларға мөмкин. Бында бары тик уҡытыусының ижади ҡарашы һәм фантазияһы ғына кәрәк. Үҙем эшләгән осорҙан шундай бер миҫал килтерер инем: икенсе класҡа яңы ҡыҙ килде. Ә минең балалар беренсе йылда үткән дәрестәрҙә матур итеп һөйләргә өйрәнгән, был ҡыҙ икенсе методика менән хәреф өйрәнгән. Һөҙөмтәлә ул синыфташтары араһында бер үҙе айырылып торҙо, бер нисек тә башҡалар кеүек һөйләргә өйрәтеп булманы. Минең методика менән уҡыған уҡыусылар өлкән синыфтарҙа ла фекерҙәрен матур итеп әйтеп бирә ала ине. Ошо китап менән эшләгән уҡытыусыларҙың кластарындағы балаларҙың ата-әсәләре башҡорт телен уҡытыуға бер ҙә ҡаршы булғаны булманы һәм юҡ та, киреһенсә, башҡорт теле дәрестәре иң ҡыҙыҡлы фән ине улар өсөн.

Ҡыҫҡаһы, XXI быуат мәктәбендә предметтар бер-береһенә бәйле алып барылырға, ә башланғыс синыфтар өсөн уҡыу әкиәт донъяһын тыуҙырырға тейеш.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмәләште.

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Башҡорт халҡының тарихын төплөрәк өйрәнгән һайын ниндәйҙер яңы һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр асыла бара. Уны бары ҡалыплашҡандан айырып, яратып, үҙ итеп өйрәнергә генә кәрәк. Ошондай фекерҙә хөрмәтле шәхесебеҙ, тарих фәндәре докторы Нәзир Мырҙабай улы ҠОЛБАХТИН. Беҙ ҙә уның был фекере менән килешәбеҙ һәм уның бәйәнендә гәзит уҡыусыларыбыҙға тарихыбыҙҙың ҡайһы бер ҡыҙыҡлы биттәре менән таныштырыға тәҡдим итәбеҙ.**

# БЕҘҘЕҢ ХАЛЫҠ КҮСМӘ ТҮГЕЛ,

## ә сауҙагәр ҙә, игенсе лә, сәнәғәтсе лә булған



➔ **Башҡорт ихтилалдарын өйрәнгән ғалим булараҡ, әле беҙгә билдәле булғандарҙан тыш, һеҙҙең эҙләнеүҙәрҙә ниндәйҙер яңылыҡтар, өҫтәлмәләктәр бармы?**

- Мине 18-се быуат эсендәге ихтилалдар барышында күпме башҡорт юҡ ителгәнлеге ҡыҙыҡһындырҙы. Күп ғалимдар асыҡлауынса, уларҙың һаны 29 мең. Тарихсылар Рычковтың яҙып ҡалдырғанына таяна һаман. Ә минең ҡарашым икенсерәк. Беренсенән, Рычков ул рус милләтенән, уның башҡорт тарихын белеүгә артыҡ йән атып тормағанлығы аңлашыла. Икенсенән, ул дворянин, юғары синыф вәкиле, ә ихтилалдар тап ошо синыфҡа ҡаршы алып барылған яу. Өсөнсөнән, Рычков - чиновник, губерна канцелярияһы секретары, губернаторҙың уң ҡулы. Шунан уйлағыҙ, ошо позицияларҙы биләп тә, ул ысынбарлыҡты яҙа аламы инде? Дүртенсенән, Рычков кабинетта ғына ултырып эшләгән кеше, уға ниндәй мәғлүмәттәр бирелгән, шуларҙы яҙған да. Ҡыҙрас Муллаҡаев биргән материалдар буйынса эшләгән, тизәр, йәнәһе лә, өс көн күсергәндәр был яҙмаларҙы. Һәм ошолар буйынса Ырымбур губернаһы тарихын ҡағыҙға төшөргән дә. Асылда, Рычковтың китабы сыға ла, Муллаҡаевтың яҙмалары юҡ ителә. Шулай булғас, мин үҙ сиратымда, был китапҡа артыҡ ышанмаҫ та инем.

Минең тикшеренеүҙәрем ошондай һөҙөмтә бирҙе: 18-се быуат эсендәге ихтилалдар һөҙөмтәһендә 250 мең самаһы башҡорт ҡырыла. Был бөтөн халыҡтың яртыһы, тигән һүҙ. 18-се быуат башында беҙҙең һан иҫәбе 450-500 мең араһында булып иҫәпләнһә, ошо уҡ быуат аҙағында иһә улар 198-200 меңгә саҡ етә. Йәғни, ул заман баҫмаларында йәки шулар мәғлүмәтенә таянып яҙылған хеҙмәттәр дөрөҫләнгән ышаныс булмай.

Ә. Усманов, 1755 йылғы ихтилалдан һуң 10 меңгә яҡын башҡорт ҡаҙаҡ далаларына ҡаса, тип яҙа. Был һандар бары тик һуғышсы була алған ир кешене генә сағылдыра. Ә башҡорт бит үҙе китә икән, ғаиләһен дә алып киткән. Ҡатыны, балаларын ҡушып, һәр ғаиләне бишәр кешенән торған тип кенә иҫәпләгәндә лә, 50 мең башҡорт ҡаҙаҡ далаларына киткән, тип алырға була.

Башҡорттар яҡлау эҙләп, ҡаҙаҡ далаларына ҡаса ла ул, батшабикә Елизавета Петровна ҡаҙаҡтың Абулхаир ханына "переловите, мужчин убивайте, жен, детей и имущество забирайте" тигән фарман бирә. Тарихтан билдәле булыуынса, Иртыш йылғаһының үрендәге бер күл янында өс ҡаҙаҡ жуздарының берләшкән ғәскәре шул ҡасып килгән башҡорттар менән дүрт тәүлек буйына һуғыша. Шунан ғына сығып фекер йөрөткәндә лә, дүрт тәүлек буйына берләшкән ғәскәрҙәргә ҡаршы тора алғас, улар 10 мең генә булмаған, әлбиттә. Был темаға дауам итеп өйрәнә бирһәм, Ырымбур архивында шундай ҡыҙыҡлы яҙмалар таптым. Шул илленсе йылдарҙа киткән башҡорттар бары тик һикһәненсе йылдарҙа ғына үҙ тыуған ерҙәренә ҡайта башлайҙар һәм шуларҙың 15 мең тирәһе теркәлгән. Бына ниндәй аянысло булған халҡыбыҙ кисергәндәр.

➔ **Автономияның 100 йыллығын билдәләйбеҙ, шулай уҡ суверенитет яулау тарихы ла тыңәрәк датаға яҡынлаша. Бөтөн был күрһәткестәр халҡыбыҙҙың үҙаллы булыуға ынтылышы ла, әммә бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда, күп эштәрҙең сифатлы емеше лә юҡ кеүек...**

- Тарих эмоциялар фәне түгел, тиһәм дә, заманында үҙем дә "милләтем, тарихым, азатлыгым" тип аҙ янманым. Шулай уҡ ҡоролтайҙарҙа ҡатнаштым, ялҡынлы сығыштар яһаным, ниндәйҙер хоҡуҡтарыбыҙҙы булдырыу, яҡлау яғында булдым. Тик... беҙҙең бынан йөҙ йыл элекке лә, егерме йыл элекке лә үҙаллы булырға ынтылыуыбыҙ һәм шул тирәләге эштәр башҡорттоң тап бороноғо ер һатҡандағы "анау ҡайындан, бынау йылғаға са" тигән килешеү кимәленән үтә алмай. Нисек кенә аянысло һәм тупаҫ булмаһын, уның дөрөҫө шулай. Закон нигеҙендә грамоталы булыу етешмәй һаман да. Яулап алғаныбыҙҙы нығытырлыҡ һәм яҡларлыҡ белемле ул һәм ҡыҙҙарыбыҙ ҙа аҙ, булғандары ла халыҡ мәнфәғәтендә түгел, үкенескә ҡаршы. Әлеге көндә башҡорт теленең ошолай ҡыҫырыҡланыуы ла бынан егерме йыл элек яуланған суверенитет хоҡуҡтарын ҡулланып эш итә белгән депутаттарыбыҙ булмауының бәләһе ул. Бөгөн улар нимә генә тип аҡланһа ла, ниндәй генә төтөн осорһа ла, факттар үҙҙәре өсөн үҙҙәре һөйләй. Һәм бына бөгөн килеп тағы шул уҡ хәл - халыҡ исеменән сығыш яһарлыҡ дәүләт эшмәкәрҙәребеҙ табылмай.

Ҡылыс болғап, трибунала телмәр һөйләп кенә яуланмай хоҡуҡтар. Уларҙың артында юридик документтар, законға ярашлы дөгүәләр булмаһа, был эмоциялар ваҡыт үтеү менән һүнәһүрелә лә, һөҙөмтәлә бер нәмә лә килеп сыҡмай. Миҫал өсөн генә алам: әгәр улар рөхсәтһеҙ үткәрелә торған булһа, митингыларҙың да файҙаһы булмаҫ һәм уның лидерҙарына протокол төҙөләүҙән ары үтә алмаҫ. Һуң һин ул митингты етәкләйһең, халыҡты ошо сараға саҡырһаның икән, уның закон нигеҙендәге тәртиптәрен дә өйрән. Был митингтан һуң тейешле документтар төҙөләп, властарға тапшырыламы? Ошо тәртип үтәлмәһә, был митингтың ҡоро шау-шыу булыуынан тыш, бер көсө лә юҡ. Эйе, унда халыҡ үҙ фекерен белдерә. Ә артабан? Документһыҙ, ул йыйылып шаулашыу ғына булып ҡала. Ә бит беҙҙә яҡлаусы законлар юҡ түгел - бар, хоҡуҡтарыбыҙ ҙа теркәп ҡуйылған, шуларҙы төшөнөп, үҙебеҙҙе яҡлап өйрәнеү бурысы тора алдыбыҙҙа.

➔ **Һөйләшеү барышында "тарихты яратып өйрәнергә кәрәк", тинегеҙ. Нисек була ул тарихты яратып өйрәнеү?**

- Үҙ халҡыңдың тарихын яратып өйрәнеү кәрәк. Кандидатлыҡ яҡлау, профессор булыу өсөн хеҙмәт яҙып ҡына түгел, ә берәй асылмаған мәғлүмәтте асыу, табыу, яңылыҡ килтереү өсөн. Үрҙә әйтелгәнсә, "шул китапта шулай яҙылған" тигәндәр сигенән үтеп, шул халыҡтың улы йәки ҡыҙы булып тикшеренеүең зарур. Шул уҡ ваҡытта уны ғәйепләү йәки башҡалар менән сағыштырыу юлына ла баҫыу ярамай. Бына Бүгәсәү яуын - Крәстиәндәр һуғышын күпме өйрәнәләр, ниндәй генә хеҙмәттәр юҡ, тик уның батырҙары һаманға тиклем асыҡланып етмәгән. Салауат Юлаевтан башҡа тағы ла ике-өс кешене генә исемләп беләбеҙ. Ә асылда, унда башҡорттан ғына 93 полковник була. Шуларҙың 19-ы юлбашсы ролен үтәй. Ошоларҙы асыҡлағандан һуң, был әлкәнең әлегә тиклем бөтөнләй өйрәнелмәгәнен аңланым. Һәр хәлдә, башҡорт халҡына кәрәкле кимәлдә өйрәнелмәгән тарихыбыҙ. Ә бит әле әйткәндәремдә белеү өсөн тау аҡтарырға кәрәкмәне, бары ҡалыплашҡан урыҫ баҫмаларынан ситләшеп, архивта һәм бороноғо баҫмаларҙа соҡонорға ғына кәрәк булды.

Тарихты яратып өйрәнергә, тигәндә, мин бына ошо мәғәнәләрҙе күҙ уңында тоттом. Яратайыҡ үҙебеҙҙе, хөрмәт итәйек тарихыбыҙҙы һәм уны киләһе быуындарға дөрөҫ итеп тапшырайыҡ.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА әңгәмәләште.**
**(Аҙағы. Башы 43-44-се һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Йәнәйҙәр

Ғалимдар фекеренсә, был ҡәбилә тарихы яңы эраға тиклем III меңйыллыҡтан алып билдәле булған. Был ҡәбилә яңы эраның тәүге йылдарында уҡ башҡорт халҡының айырылғыһыҙ өлөшө була. X быуаттың Византия сығанаҡтарында йенех төрки ҡәбиләһенең башҡорттарҙың йәнәй ҡәбиләһенә тап килгәнлеге хаҡында әйтелә. Яҙма сығанаҡтар буйынса йәнәйҙәр тарихы мең йылдан ашыу ваҡытты үҙ эсенә ала. Йәнәйҙәрҙең этник тарихы юрматы, юрмый, бүләр, башҡорт-болғарҙары һ.б. башҡорт ҡәбиләләре менән бәйле. В.Ф. Генинг энцтарҙың һәм ненецтарҙың этнонимында осраған "йәнә" самаҙый тамыры хаҡында һүҙ алып бара.

Йәнәй ҡәбиләһе I меңйыллыҡ аҙағында, II меңйыллыҡ башында юрматы-юрмый ҡәбиләләренең этник берләшмәһенә ингән. Йәнәй-уғырҙарҙың Урта Волга буйындағы уғыр-болғарҙары һуңынан башҡорт болғарҙары йогонтоһона эләгә. XIV быуаттың икенсе яртыһында Алтын Урҙала барған ҡәбилә-ара тартҡылаш ваҡытында ундағы көнбайыш башҡорт ҡәбиләләре союзы тарҡала һәм көнсығышҡа күсә. Йәнәйҙәрҙең риүәйәте буйынса "улар урмандар араһында оҙаҡ йөрөгәндән һуң... Ыҡ, Ағиҙел һәм Кама буйына ултыра". Йәнәй ерҙәренең сиге Буй йылғаһына, Кама йылғаһының уң ярына, Иж йылғаһының ҡушылған еренә тиклем барып етә.

Йәнәйҙәрҙең башҡорт-болғарҙарға ҡараған бер өлөшө үҙенең этник йөҙөн татарҙыҡына алыштырҙы. Башҡорт ғалимы Салауат Хәмиҙуллин Башҡортостандың Янауыл районынан бер өлкән кешенең 50 йыл элек Урта Азияға сығып китеп, тыуған яғына ҡайтҡанда үҙенең ауылдаштарын танымауы тураһында һөйләй: "Мин киткәндә саҡта ауылдаштарымдың барыһы ла башҡорттар ине, ҡайтыуыма барыһы ла татар булған да киткәндәр. Ай-һай..." Хәҙерге йәнәйҙәрҙең этник аңы үҙгәреүгә ҡарамаҫтан, Кама буйында йәшәүселәрҙең күбеһе үҙҙәренең бороноғо йәнәй башҡорт ҡәбиләһенә ҡарауын бик яҡшы белә.

### Бәйләр

Бәйләр ҡәбиләһе тарихы быуаттар төпкөләнә китә. Был этноним байандур, байындыр, байат формаларында осрай. VII-VIII быуаттарҙа 1-се меңйыллыҡ аҙағына тиклем бәйләр бороноғо башҡорт сәйәси берләшмәһендә булған. Бәйләр менән был союзға үҫәргәндәр, бөрйәндәр, һеңрәндәр, түңгәүерҙәр һ.б. ингән. Был бороноғо башҡорт ҡәбиләләре хәрби-сәйәси союзы Евразияның гегемоны булған бәшәнәктәрҙең тоныҡ өлөшөн тәшкил иткән. VIII быуатта ҡимаҡтарҙың, уғыҙҙарҙың, хазарҙарҙың берләшкән көстәренән тар-мар ителгәндән һуң бәшәнәктәр союзы тарҡала һәм тоныҡҡа китә. Уларҙың башҡорт өлөшө тоныҡтағылары менән ҡушылып тороп ҡала. Бәйләр ҡәбиләһе Дим, Ыҡ йылғалары буйында ҙур майҙанды биләп тора. Был саҡтар бәйләрҙең бейе Дербеш булған.

VIII-XII быуаттарҙа ҡыпсаҡтар миграцияһы башлана. Һөҙөмтәлә биләрҙәр ҡыпсаҡтар һәм башҡа башҡорт ҡәбиләләре менән ҡушыла. Мәҫәлән, Ыҡ, Минзәлә һәм Ағиҙел буйындағы бүләр-бәйләр союзы XIV быуаттың аҙағына тиклем йәшәй.

**(Дауамы бар).**

***✓ Иң мөһиме, тыңлаусыларыбыҙ битараф түгел. Бер генә үҙгәреш тә, яңылыҡ та, хатта хата йәки яңылышлыҡ та иғтибарһыҙ ҡалмай. Шунда уҡ шылтыратыуҙар яуа башлай. Һәр кем фекерен, кәңәшен, теләген белдерергә теләй.***



# ”ЮЛДАШ” РАДИОҺЫ –

## ул һәр кемдең ғаилә

**Бөгөн радио тыңламаған кеше бармы икән? Юҡтыр. Сөнки ул хәҙер юлдағыларҙың юлдашы, өйҙәгеләрҙең өйҙәше, моң һөйөүсенең йыр муҡсаһы, хисленең серҙәше, мохтаждың кәңәшсеһе булып бөткән. Телевизор кеүек бәйләп тә тотмай, күҙгә лә көс һалмай ул, әммә үҙе бер аудио-тормош булып, бар булмышты ялмап ала. Заманында радио халыҡты мәғлүмәтле итеү маҡсаты менән барлыҡҡа килгән булһа, ул бөгөн дә шул маҡсатына хеҙмәт иткән талымһыҙ өлкәләрҙең береһе. Республикабыҙҙа беҙ был хеҙмәтте "Юлдаш" тип беләбеҙ. Гәзит уҡыусыларыбыҙға "Юлдаш" радиоһының баш мөхәррире Миләүшә Ҡасим ҡыҙы ЙӘҒӘФӘРОВА менән һөйләшеү тәҡдим итәбеҙ.**

**Тыңлаусыларығыҙ һеҙгә радионың үҙ тормоштарында ниндәй роль уйнауы хаҡында фекер белгертәләрме? Нимә тиҙәр, мәҫәлән?**

- Һеҙ беҙҙең ғаилә ағзаһы, тиҙәр. Бының менән килешәбеҙ. Иртәнсәк уятабыҙ, һауа торошо, донъя, ил, республика хәл-торошонан һуңғы хәбәрҙәр менән таныштырабыҙ, юлдарҙағы хәлде аңғартып, йыр-моң менән эшкә оҙатабыҙ, көнө буйы дәртләнеп эшләрлек итеп кәйефте күтәрәбеҙ, әҙәби әҫәрҙәр, шиғри

**Һеҙҙә алып барылған проекттарға айырым туҡталып үтәйек әле. Ябай кешеләр радио аша артист булып та китә ала, тиҙәр бит. Нисек башҡарыла был мөғжизә?**

- Был бер ниндәй ҙә мөғжизә түгел, "Юлдаш "хеҙмәткәрҙәренең ябай, әммә бик ҙур яуаплылыҡ талап иткән бер нисә айлыҡ эше. Ул бәйге иғлан итеүҙән башлана. Һәр төбәктең үҙ гәүһәрҙәре бар. Ошо халыҡ таланттары йырҙар ебәрә. Радио үҙ сиратында уларҙың һәләтен билдәләүсе белгестәрҙе ылыҡтыра, профессиональ композитор, шағирҙар, музыканттарҙан тупланған төркөм йырҙарҙы тыңлай, баһалай. Сәнғәткә бөтөнләй бәйләнештәре булмағандар ҙа, әммә тәбиғәттән моңло тауышҡа эйәләр, билдәле булыу өсөн бер ҡасан да һуң түгел, тип, "Юлдаш йыры" проектында ҡатнаша. Төҙәлештән, дауаханан, алыҫ Себерҙән, магазин прилавкаһы артынан, студент эскәмйәһенән, сит төбәктәрҙән, төрлө ауылдарҙан эштәрен ҡуйып тороп, беҙгә килеп үҙҙәрен һынап ҡарай улар. Беренсе турҙан үткәндәрен махсус радио тапшырыуҙары аша тыңлаусыларыбыҙ менән таныштырабыҙ, жюри ағзалары финалға үтеүселәрҙе билдәләгәс, улар менән тығыҙ эш башлана. Күлдәк төҫөнән алып, сәхнәләге сығыштан һуң баш эйгәнсегә тиклем етәкләп алып барырға тура килгәндәре аҙ түгел. Концертта улар тейешле кимәлдә тамашасыға күренһен өсөн визажистар, грим оҫталары саҡырабыҙ, кейемдәре буйынса стилистар менән кәңәшләшәбеҙ, сығыштарын биҙәү өсөн төрлө постановкалар эшләйбеҙ, бейеүселәр йәлеп итәбеҙ, еңеүселәргә бүләктәр әҙерләйбеҙ, телевидениеға төшөрөп, зәңгәр экрандарҙан күрһәтәбеҙ һ.б. Әлбиттә, был кешеләр барыһы ла артист булып китмәй, әммә артистарҙан кәм булмаған популярлыҡ яулай, үҙ тамашасыларын булдыра. Улар өйрәнгән мөхиттәренән айырылып, яңы донъя күрә, яңы шәхестәр менән аралаша, өр-яңы хис-тойғолар кисерә. Кемдәрҙер ғүмер буйы күңелдәрендә йөрөткән хыялдарын тормошҡа ашыра - йырсы булып ҡарай, ҡайһылары сәхнәлә "ҡала". "Юлдаш" асҡан исемдәр, ошо проекттан һуң эстрада йондоҙҙары булып китеүселәр тиҫтәнән ашты. Был беҙҙең эш һөҙөмтәһе тип ғорурланабыҙ. Уларҙың ижади юлын күҙәтәбеҙ, ярҙам кәрәк саҡта иң терәйбеҙ. Былай тәфсирләп һөйләүемдең сәбәбе бар. Ошо эште башҡарып сығыу өсөн ситтән бер кеше лә саҡырылмай, бер тин аҡса ла индерелмәй. Матди яғын компания үҙ иненә ала, ойоштороу эштәрен 24 сәғәтлек эфирҙы тәьмин иткән радио хеҙмәткәрҙәре башҡара. Улар бер ыңғайы тапшырыуын да эшләй, командировкаларға ла йөрөй, сценарийҙар яҙа, тура эфирҙар алып бара, ошо проекттарҙы ла тормошҡа ашыра. "Ташҡа баҫылыу"мөмкинлеген файҙаланып, хеҙмәттәштәремдең күҙгә күренмәгән, күп осраҡта тәнҡит утына тотолған, һирәк маҡталған оло хеҙмәте өсөн мең рәхмәттәр еткерәм.



**Радиоға тағы ла нимәләр конкурент була ала? Тыңлаусыларығыҙҙы күбәйтеү өсөн нимәләр эшләйһегеҙ йәки халыҡты йәлеп итеү өсөн нисек көрәшәһегеҙ?**

- Беҙҙең холдингта ғына йәмғеһе 4 радио эшләй. Улар "Юлдаш", "Ашҡаҙар", "Спутник ФМ" һәм "Юлдаш+" интернет радиоһы. Һәр ҡайһыһының үҙ юлы, үҙ тыңлаусыһы, ниндәй ҙә булһа махсус саралары бар. Беҙҙән тыш, республикала ғына түгел, илдә киң таралыу алған радио селтәрҙәр гөрләп эшләй. Әлеге лә баяғы интернет сәскә ата. Ғөмүмән, мәғлүмәт килтереүсе, өйрәтеүсе, ҡыҙыҡтырыусы, үҫтереүсе, арбаусы бөтә төрлө саралар ҙа конкурентлыҡ тыуҙыра ала. Әммә был тәбиғи, конкуренттарһыҙ, тәнҡитһеҙ үҫеш тә булмай.

Беҙ һеҙҙең менән үрҙә телгә алған проекттар тап ана шул халыҡты йәлеп итеү саралары ла инде. Көндәлек сифатлы эш тураһында, халыҡсанлыҡ тураһында һүҙ ҡуйыртып тормайыҡ.

**Тыңлаусыларығыҙ даирәһе тураһында нимәләр әйтерһегеҙ?**

- Башҡортса, татарса белгән, йәшәгән төбәгендә радиотапшырғыстар ҡуйылған, радиоалғыс алырға, йәки башҡа гаджеттарҙан тыңлау мөмкинлеге булған бар халыҡ, тиһәм, фәстереү булмаҫ, моғайын.

2010 йылдан 2016 йылға тиклем "Ашҡаҙар" радиоһында эшләнем. Унда бер йүнәлеш - мәҙәниәт өлкәһе. Театрҙар, филармониялар, кино сәнғәте, фестивалдәр, композиторҙар, шағирҙар донъяһындағы яңылыҡтарҙы, үҙгәрештәрҙе күҙәтеп бараһың. Ошо ижади донъяла ҡайнайһың. Тыңлаусылар 40-тан юғары йәштәге, үҙ юлдарын тапҡан, тормошта урынлашҡан, мәңгелек ҡиммәттәрҙең ҡәҙерен белгән кешеләр категорияһы. Ә "Юлдаш"ҡа килгәндә инде, уның тыңлаусыларының йәш даирәһе лә, социаль ҡатлам да бик киң. Сабый балалар ҙа, уҡыусылар ҙа, студенттар ҙа, уларҙың ата-әсәләре лә, олатай-өләсәләре лә үҙ шәлкемдәр тыңлатып, уйландырабыҙ, радиосәйәхәттәр ойоштораБыҙ, уйнатабыҙ, ашарға бешерергә өйрәтәбеҙ, юғалғандарҙы эҙләшәбеҙ, билдәле шәхестәр, белгестәр менән осраштырабыҙ, улар менән аралашыу мөмкинлеге бирәбеҙ, ҡәҙерле кешеләргә бүләк эшләргә ярҙамлашабыҙ, республикала уҙған фәһемле сараларға саҡырабыҙ, төрлө социаль акциялар, концерттар ойоштораБыҙ, изге эштәргә өндәйбеҙ һ.б. Бының өсөн тыңлаусыға ваҡыт бүлергә лә, сығымдар сығарырға ла, шарттар булдырырға ла кәрәкмәй, бары төймәгә баҫып, радионы ҡабыҙыу ҙа етә. Бигерәк тә сәләмәтлеге буйынса мөмкинлеге сикләнгәндәр радионы яҡын дуҫына, серҙәшенә әйләндерә.

Белеүегеҙсә, беҙ дәүләт радиоһы, дәүләт органдары менән халыҡты бәйләп тороусы еп, тип әйтәйек. Шуға ла закондар менән таныштырып барыу, власть вәкилдәре менән осраштырыу, ҡанундарға асыҡлыҡ индереү кеүек эште лә алып барабыҙ, бының өсөн махсус ижтимағи-сәйәси редакциябыҙ бар.

Шулай уҡ өйҙәге, эштәге йәки машиналағы радиоалғыс аша һөйләп, йырлап ҡына торған радио үткәндәрҙә ҡалғандыр, тим, сөнки "Юлдаш" республика кимәлендә күп халыҡ ҡатнашлығында саралар уҙғара. Шуларҙан иң ҙурҙары - "Юлдаш йыры", "ЮлдашХит", "Һаумы, студент!" проекттары. Замананан артта ҡалырға теләмәгән һәр мәғлүмәт сараһы кеүек үк, интернет киңлектәрендә ҙур эш алып барыла. "Бәйләнештә" битендә 35 меңдән ашыу яҙылыусыбыҙ бар, башҡа мессенджерҙарҙа ла беҙҙе еңел генә табырға, тыңларға, аралашырға мөмкин. Был тәү нәүбәттә республиканан ситтә йәшәүсе тыңлаусыларыбыҙ өсөн уңайлы.

итә беҙҙең тапшырыуҙарҙы. Бәйләнешкә күберәге ауыл кешеләре, ҡатын-ҡыҙҙар сыға, әммә һуңғы осорҙа эфирҙарҙа ир-егеттәрҙең, йәштәрҙең һәм ҡала кешеләренең әүҙемлек күрһәтеүе һиҙелә. Тапшырыуҙар бар ҡатламдарҙы ла күҙ уңында тотоп әҙерләнә. Шуға, уларға бәйле тыңлаусыларҙан Тургеневса "атайҙар һәм балалар" проблемаһы күтәрелеп, дәғүә белдереүселәр табыла, йәғни йәштәргә өлкәндәр өсөн әҙерләнгәндәре, ҡарттарға йәштәр йырҙары, улар өсөн әҙерләнгән рубрикалар оҡшамай китә. Алтын урталыҡ торға тырышабыҙ. Иң мөһиме, тыңлаусыларыбыҙ битараф түгел. Бер генә үҙгәреш тә, яңылыҡ та, хатта хата йәки яңылышлыҡ та иғтибарһыҙ ҡалмай. Шунда уҡ шылтыратыуҙар яуа башлай. Һәр кем фекерен, кәңәшен, теләген белдерергә теләй. Бигерәк тә аралашыуға саҡырған тапшырыуҙарҙы яраталар, ихлас ҡатнашалар. "Иртәнсәккәй тороп", "Самауыр янында", "Асыҡ студия", "Илһам ҡанаттарында" кеүек интерактив проекттарҙың популярлығы тәү сиратта халыҡтың уларҙа теләп ҡатнашыуынан да киләлер.

**Тел мәсьәләһе бөтөн ерҙә лә ҡырҡыу бөгөн. Милләттең һәр вәкилен борсорға тейеш телебеҙ яҙмышы, һәр кемебеҙ айбарланып уны һаҡлау тураһында хәстәрләргә тейешбеҙ. Радио көрәшсеме был майҙанда?**

- Барлыҡҡа килгән көнөнән алып Башҡортостан радиоһы башҡорт теле һағында тора, уның йәшәүе өсөн көрәшә һәм ошо функцияһын әлегәсә бер көнгә лә туҡтатҡаны юҡ. Тәүлек әйләнәһенә саф башҡорт-

✓ *Һәр беребеҙ үҙ урынында иңдәренә яуаплылыҡ алып, хәленән килгәнде башҡара, милләтенә тоғролоғон һаҡлай һәм намыҫы алдында яуап тота икән, урамға сығып әләм болғап йөрөүҙең кәрәге лә булмаясаҡ.*



са һөйләп, йырлап, бер-бер артлы фәһемле тапшырыуҙар әҙерләп торған, туған телде пропагандалаған, уның нескәлектәрен, яғымлылығын, нәфислеген һәр икенсегә еткергән тере йән ул радио.

Тел мәсьәләһендә беҙгә тәнҡит тә ишетергә тура килә. Был тәбиғи. Үҙ һөнәрен, йүнәлешен дә, башҡорт телен дә яҡшы белеп, беҙҙең эфирҙарға килеп һорауҙарға яуап бирерлек, әңгәмә ҡорорлоҡ респонденттар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Күптәренә яуаптарҙы яҙып, тәржемә итеп биреүебеҙ ҙә сер түгел. Шул уҡ ваҡытта тура эфирҙа эшләгәндә халыҡ менән аралашыуҙы ла, телефонға яуап биреүҙе лә, яңғыраясаҡ сираттағы йырҙы хәтерҙә тотоуҙы ла, режиссерҙың ымдарына иғтибар итеүҙе лә, алдыңдағы компьютерҙан смс хәбәрҙәрен, яңылыҡтарҙы һөйкәндар һәм сыҡмағандар" лагерына бүленеп ята. Ниндәйҙер ғәйепләүҙәр, һүҙ ташлауҙар бар. Үҙебеҙ өсөн яуап бирә алабыҙ. Халыҡ мәнфәғәттәре өсөн хеҙмәт итеүҙән туҡтағаныбыҙ юҡ - был беҙҙең гражданлыҡ бурысыбыҙ. Рухи ҡомартҡыларыбыҙҙы һаҡлау һәм пропагандалауға ҙур өлөш индерәбеҙ - былары иһә һөнәри бурыстарыбыҙ. Шәхсән үҙемә килгәндә, үҙ телендә аралашҡан, башҡорт яҙыусыларын, шағирҙарын, рәссамдарын белгән, башҡорт театрҙарына яратып йөрөгән, республикаһының тәбиғәтенә ғашиҡ, йыр-моңдарын тыңлаған балалар үҫтерҙем - былары әсәлек бурыстарым. Эш урынымда башҡорт телендә эшләүсе грамоталы, оҫта, заманан артта ҡалмаған журналистар тәрбиәләргә тырышам. Һәр беребеҙ үҙ урынында иң-

**барыусы бындай осраҡта ни эшләй ала?**

- Тура эфирҙа бәйләнешкә инеүсене бер нисек тә контролдә тотоп булмай. Уның әйткән хәбәре бары тик уның тәрбиәһенә һәм психик торошона ғына бәйле. Әммә ниндәй осраҡта ла тапшырыу алып барыусы юғалып ҡалырға ла тейеш түгел, һөйләшкән икәүҙән тыш, тағы меңәрләгән тыңлаусы янда икәнде бер ҡасан да иҫтән сығарырға ярамай. Шөкөр, ундай хәлдәр һирәк. Тыңлаусыларыбыҙ "ғаилә ағзаһына" әйләнеп бөткән радио алып барыусыларына һәр саҡ тиерлек яҡшы мөғәмәлә лә. Һуңғы арала уйҙарын урынлы һәм ҡыҫҡа итеп еткерергә өйрәнеп алдылар, алып барыусыны йәки ҡунаҡты уҙҙырып, тос фекер еткереп ҡуйыусылар ҙа аҙ түгел. Әлбиттә, күптәренең эмоция нигеҙендә генә, бер нәмәгә дәлилләнмәгән, нигеҙләнмәгән һүҙ ташлау икәнлеген дә аңлайбыҙ. Бер һөйләм, бер рубрика, бер йыр ишетеп ҡалып, тотош радионың 17 йыллыҡ эшен юҡ кимәленә төшөрөргә баҙнат итеүселәр ҙә юҡ түгел. Ундайҙарға етди иғтибар итһәң, бөтөнләй эшләмәҫкә кәрәк. Әммә, бәхеткә күрә, аңлы һәм аҡыллы тыңлаусыларыбыҙ күберәк һәм уларҙың яҡшы кәйефе, йылы мөнәсәбәте беҙҙе лә юғарыраҡ эштәргә илһамландыра.

**Интернеттың киләсәктә китап уҡыуҙы, гәзит-журналдарҙы, радио-телевидениены ғына түгел, хатта күҙгә-күҙ ҡарашып аралашыу төшөнсәһен дә юҡҡа сығарып, кешелектең яңы бер йәшәү системаһын барлыҡҡа килтереп**

**ҡуйыуын күҙаллап борсолоу тыумаймы? Беҙҙең балаларға, балаларҙың балаларына ниндәй көндәр килә, тип борсолабыҙ бит, юғиһә...**

- Һәр уйлай белгән ата-әсә балаһын үҙ заманының ҡара көстәренә, негатив күренештәренә йәки ҡаршылыҡтарға әҙерләргә бурыслы. Ашатып-эсереп уҡытыуҙы ғына алға ҡуйырға түгел, ә рухи көс туплауҙы ла күҙ уңында тоторға кәрәк. Мин, мәҫәлән, интернетты ундай "донъя" итеп күрмәйем, ә бары тик мәғлүмәт алыу сараһы итеп кенә ҡарайым. Быны балаларыма ла аңлатҡанмын. Уларҙа интернетҡа үтә бәйле булып, сыға алмай ултырыу ғәҙәте юҡ. Шунлыҡтан, үҙ балаларымдың китап уҡыу, аралашыу, хәл белеү кеүек матур ғәҙәттәрҙе йәки башҡа рухи ҡиммәттәрҙе интернет донъяһына алмаштырырын күҙ алдына ла килтермәйем. Ғөмүмән, тора-бара кешелек үҙе лә интернет аралашыуҙарҙың яҡшы һәм яман яҡтарын аңлар, кәрәк урындарын сикләр һәм шулай итеп уны ла йәшәү системаһының бер уңайлы өлөшө итеп урынлаштырып алыр ул, тигән өмөттәмен. Һәр нәмәнән дә файҙалыһын һәм ыңғайын ғына ҡабул итеп өйрәнергә кәрәк. Шул осраҡта йәмғиәттә лә, һәр шәхестең үҙ күңел донъяһында ла алға китеш тә, үҫеш тә мотлаҡ буласаҡ.

**Киләсәктә тыңлаусыларығыҙҙы нимәләр менән шатландырырға уйлайһығыҙ?**

- Барығыҙҙы ла 15 ноябрҙә йәнә бер ҙур проекттың йомғаҡлау концертына "Башҡортостан" концерт залына "ЮлдашХит"ҡа саҡырабыҙ. Бында инде йыл дауамында уҙып барған хит-парад еңеүселәре сығыштары буласаҡ. Тыңлаусыларыбыҙ үҙҙәре һайлаған йырҙар башҡарыласаҡ. Күренекле ҡунаҡтар ҙа саҡырылған. Уйындар, юморға бай алып барыусы егеттәребеҙ, билет алыусылар араһында уйнатыласаҡ бүләктәр - барыһы ла йылдағыса мауыҡтырғыс булмаҡсы. Быйылғы концерттың тағы бер үҙенсәлеге - 10 минут һайын тамашасылар хор менән йырлаясаҡ. Ни өсөн тиһегеҙме? Килгәс, күрерһегеҙ. "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға "Юлдаш"тарҙан иң изге теләктәр. Беҙҙең яратҡан девизыбыҙҙы һеҙгә лә еткерәбеҙ: "Беҙ бергә!"

# УЛ АУДИО-ТОРМОШ,

## ағзаһы кеүек...

ҙөп ултырыуҙы ла бер юлы атҡарырға тура килгән алып барыуысының телмәрендә ниндәйҙер хилафлыҡ булыуы мөмкин, әлбиттә. Оҙаҡ уйланып ултырып яҙылған, кәрәк урындары төҙәтелгән, ҡат-ҡат тикшерелгән гәзит-журналдарҙағы мәҡәләләр, яҙмалар менән эшләүсе хәбәрселәр менән беҙҙең хәбәрселәр араһында айырма ҙур. Беҙҙең дә яҙма тапшырыуҙар бар, уларға тел тейҙереүе ауыр, сәбәп юҡ. Тел таҙалығы өҫтөндә эште туҡтатҡаныбыҙ юҡ, быны бурысыбыҙ һанайбыҙ.

Шуны ла өҫтәп киткем килә. Бөгөн ни өсөндөр башҡорт интеллигенцияһы "митингка сыҡ-

дәренә яуаплылыҡ алып, хәленән килгәнде башҡара, милләтенә тоғролоғон һаҡлай һәм намыҫы алдында яуап тота икән, урамға сығып әләм болғап йөрөүҙең кәрәге лә булмаясаҡ. Минең фекерем шулай.

**Радионың күп тапшырыуҙары тура эфирҙа бара, тип билдәләп үттек. Шундай тура эфир тапшырыуҙарында халыҡ менән аралашыуҙы контролдә тотоп буламы? Мәҫәлән, алып барыусылар менән кем генә бәйләнешкә инмәҫ, шулай бит, тупһыҙ һорауҙар, әҙәпһеҙ комментарийҙар, тупаҫ тәнҡит булырға мөмкин. Тапшырыуҙы алып**

көтөлмәгән хәлдәргә лә тура эфирҙа ултырыусы журналистар әҙер булырға һәм ниндәй хәлдә лә үҙҙәрен ҡулда тота белергә тейеш. Был ҡанун. Беҙҙә һәр дүшәмбе уҙған аҙналағы эшмәкәрлеккә анализ яһаусы йыйылыштар үтә. Унда бөтә хеҙмәткәрҙәр ҙә ҡатнаша. Эфирҙы 7 көн дауамында сиратлап тыңлап барыусы дежур хеҙмәткәрҙәр сығыш яһай, тәнҡит утына тота, уңышлы тапшырыуҙарҙы маҡтай, хилафлыҡтарға иғтибарҙы йүнәлтә. Хаталар өҫтөндә эштең туҡтағаны юҡ.

Әйтеп үтергә кәрәк, ҡәнәғәтһеҙлек белдереүселәрҙән шылтыратыуҙар ҙа һирәкләп булып тора, һуңғы арала был юҫыҡта интернет селтәрен ҡулланыусылар ҙа бар. Урынлыларына иғтибар итәбеҙ,

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**



"Юлдаш" радиоһы коллективы "Юлдаш" йыры-2017" конкурсанттары менән.

***✓ Беҙ бит кеше генә түгел, ҡатын-ҡыҙ, быуындар сылбырын киләсәк менән бәйләүсе зат. Хәләл һөтөбөҙ менән йыртҡыстарҙы түгел, үҙ балаларыбыҙҙы имеҙергә бурыслыбыҙ…***



Шунда уҡ тағы ла ике көсөк ауа-түнә йөрөп ята. Эт яҡынлауымды күргәс мөйөшкә һырынды ла уҫал, янаулы ырылданы. Улым да мине күргәс тороп ултырҙы, һөт сәсрәгән ауыҙын ең һырты менән һыпырҙы. Әммә тороп эргәмә килергә уйламай ҙа. "Кил, ҡайтайыҡ", тип ҡулымды һоноуым булды, теге эт йомғаҡтай йомарланып, уҡтай атылып ташланды ла beләгемә тештәрен батырҙы. Ауыртыуға сыҙамай, ҡырағай тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙем. Эттең беләгемде ҡармаған ҡапҡандай эйәктәре ысҡынды-рырға уйламай ҙа. Ярҙам һорап тағы ҡысҡырҙым, тағы. Шунан ебәрмәҫ өсөн йәбешкән этте һөйрәп тышҡа, яҡтыға тәнтерәкләнем. Минең ярҙамға саҡырыуымды ишетеп килеп еткән һалдат киҙәнеп штыгы менән этkә ҡаҙаны ла бил ҡайышын ысҡындырып ҡан урғылған беләгемде һыҡтырҙы. Ыңғыраша-ыңғыраша әйтә һалдым: "Тегендә, эстә, минең улым..." Һалдат йорт эсенә инеп юғалғас этkә ҡараным, уның йәшәү нуры ҡайта башлаған күҙҙәре миңә нәфрәт менән төбәлгәйнеләр... Бер аҙҙан көсөктәрҙе тотоп килеп сыҡҡан һалдат тегеләрҙе көс менән стенаға бәрҙе. Саңҡылдарға ла өлгөрмәй йән бирҙе мәхлүктәр. Арттан юрғалап эйәргән малайым эргәмә киләһе урынға үлгән этте, көсөктәрҙе йәлләп сеңләп иларға тотондо.

Яра оҙаҡ төҙәлмәй яфаланы. Төҙәлһә лә был ваҡиға ҡурҡыныс төш һымаҡ онотолманы, ваҡыт-ваҡыт иҫләтеп торҙо, әйтеп үткәнемсә эҙһеҙ ҙә үтмәгән икән. Һөйләгәнемде әкиәт итеп ҡабул итмә. Был улымдың насар ҡылыҡтарын аҡларға тырышып сығарған, фантазияға тартым хикәйәт кенәлер, бәлки. Ә ейгән рисыҡтың кеше фиғеленә йоғонто яһауы хаҡында ошо һиңә һөйләгән хәлде аныҡламай ғына киленемә еткергәйнем. Ул шуға бала имеҙеүсене оҙаҡ эҙләне. Был тапҡанын да әйтер инем, ташҡа үлсәйем... Һин мине тыңлайһыңмы, балам?

- Эйе тыңлайым...

- Тыңлаһаң, әйтерем шул, кит һин был йорттан... Ҡайтырлыҡ аҡса хәстәрләмәһәң, бына ошоно ал. - Ул яҫтыҡ аҫтына ҡулын тығып төргәк килтереп сығарҙы ла аҡса иҫәпләне. - Биргәнем артығы менән етер... Кешегә бәләмде һалып өйрәнмәгәнмен, быларҙы гүр саҙаҡаһына, тип төйнәгәйнем дә, үлемде саҡҡа ғына кисектереп торорға тура килер... Тик, үтенәм, кит. Беҙ бит кешеләр, шуны онотма, кеше генә түгел, ҡатын-ҡыҙ, быуындар сылбырын киләсәк менән бәйләүсе зат. Хәләл һөтөбөҙ менән йыртҡыстарҙы түгел, үҙ балаларыбыҙҙы имеҙергә бурыслыбыҙ... Беҙ кешеләр, балам!

Ярты төн ауышҡан. Дилемманың күҙҙәренә тамсы ла йоҡо ҡунмай. Түшәмгә, билдәһеҙлеккә төбәлгән. Иҙәндә бөгөн кис имеҙелмәгән көсөктәр тамаҡ һорап сыйнап, үрһәләнеп улай-былай йүгерешәләр. Ҡарсыҡтың әйткәндәренән аҙаҡ көсөктәргә яҡынлай ҙа уларҙы ҡулына ала ла алмай. Өшөгәндәй түшәгендә йомарланды. Хас та әсә ҡарынында ятҡан сабый инде. Теге саҡ табип нимә тигәйне әле: "Бала ҡарында барыһын белеп, тойоп ята. Әгәр ул үҙенең кәрәкһеҙлеген, артыҡлығын тойһа, тынысһыҙланырға тотона." Ә ул икһеҙ-сикһеҙ йыһан ҡарынында йомарланған йән әлеге мәлдә кемгәлер кәрәкме, ҡәҙерлеме, танһыҡмы? Юҡ! Ул хайуан кимәленә төшөрөлгән, кәмһенгән, кәмһетелгән артыҡ кеше. Күп аҡса эшләргә, әҙәмсә көн итергә тырышып ниндәй көнгә төштө! Ары былай йәшәргә ярамай! Ярамай! Усына яңыраҡ һатып алған телефонын ҡыҫты. Кәрәкме икән уға телефон? Алғанына бөгөн нисәнсе көн, кемгәлер шылтыратҡаны һәм уға шылтыратҡандары юҡ. Уның башҡаларға кәрәге бөтә бара, кешеләр донъяһынан алыҫлаша, тимәк. Әллә тоторға ла өйҙәренә шылтыратырға микән? Өләсәһенең, ҡартатаһының хәлен белһә, күңел көйөгө баҫылыр ине. Тик нимә тиер? Рәнйетерлек һүҙҙәр әйтеп сығып китте бит.

Шул мәл күҙҙәрен сағылдырып ут ҡабынды. Тертләп ҡалҡты ла одеалы менән тәнен ҡаплап инеү яғына төбәлде. Унда тере ҡараҫҡылай ишек яңағына һөйәлеп лаяҡыл иҫерек хужа тора. Ул алға аҙымланы ла тигеҙлеген һаҡларға теләп ҡулдарын йәйҙе, шунан футболкаһын ҡалҡытып йөнтәҫ эсен тырнағас һалынҡы башын ҡалҡытып, ҡан һауған күҙҙәренең ағын әйләндереп иләмһеҙ йылмайҙы:

- Был мин, һинең непосредственный хужаң! Хәлеңде белергә килдем. Нисек йәшәп ята икән имеҙеүсе, мәйтәм. Насар түгелдер, эш хаҡын ваҡытында, һуңлат-май, ғәҙел түләйем. Бурыслы булып өйрәнмәгәнмен. Кемдәрҙер бурыслы, минең генә бер кемгә лә бирәсәгем юҡ. Бөгөн, хатта хәҙер үлһәм дә башҡалар алдында намыҫым таҙа. Ә бит кешенең үҙенән аҙаҡ эшләнмәгән өс көнлөк эше ҡала тиҙәр. Ә мин барыһын да теүәлләп бөтөрҙөм, үәт! Туҡта, туҡта! Һин нишләп ҡушылған эшенде үтәмәйһең? - Ул иҙәндә тунҡанлаған көсөктәрҙе күргәс йөҙөндәге йылмайыу һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты. - Көсөктәр имеҙелмәгән бит? Улар ас! Мин һиңә ни өсөн аҡса түләй тиһең! - Ул кинәт алға ташланды, одеялды ситкә атып бәреп, күкрәксәне матҡып ситкә ырғытты ла сәстәренән һөйрәп уны иҙәнгә быраҡтырҙы. - Имеҙ көсөктәрҙе, кәнтәй!

Карауат яңағына эләгеп сикәһе һыҙырылды Дилемманың, терһәге ҡаҡ иҙән таҡтаһына бәрелеп шаңҡыны. Ауыртыуҙы еңеп кире аяғына баҫты ла ишек яғындағы мөйөшкә һырынды. Хужа ҡамап ҡыҫырыҡлағандай ҡоласын йәйеп килде лә аңғармаҫтан киҫкен хәрәкәтләнеп эсенә һуҡты. Һеңгәҙәткес ауыртыу бер мәлгә генә аңын юйҙы. Ул бөгөлөп төштө, тубыҡланды шунан иҙәнгә ҡоланы. Шуны ғына көткән ас көсөктәр уға ташланды.

Хужа карауатҡа ултырып йәйелде лә күптән күҙәтмәгән танһыҡ тамашаһын кинәнеп ҡарай башланы.

Мейеһен ҡарсыҡтың әйткәндәре тетрәтте: "Беҙ кешеләр, балам, шуны онотма! Беҙ йыртҡысты түгел, әҙәм балаһын имеҙергә бурыслы, Хоҙай Тәғәлә беҙҙе шуның өсөн яратҡан..." Ул асыу менән имсәктәренә һөлөктәй йәбешкән көсөктәрҙе алып ситкә ырғытты ла ҡырағай кейектәй ынтылып өҫтәлдә ятҡан бысаҡты эләктерҙе:

- Яҡынлап ҡына ҡара, хәҙер йәнеңде алам! Мин кәнтәй түгел, ҡатын-ҡыҙ, шуны онотма! Бар сыҡ, башҡаса, рөхсәтемдән тыш бында инеп йөрөйһө булма! - Шулай тине лә үҙендә аңлата алмаҫлыҡ еңеллек һиҙҙе, күңелендәге, теге, уны өҙлөкһөҙ түбәнселеккә ҡотортҡан шәүлә-йән ҡайҙалыр сығып осҡайны, был һүҙҙәр таҙарыныу кисергән күңеленән урғып сыҡтылар.

Көтөлмәгән хәлдән шөрләй төшкән хужа телдән ҡалды башта, шунан стена ҡырлатып барып ишек төбөнә еткәс көслөк менән асыуын йотоп әйтте:

- Һинең менән иртәгә һөйләшермен. Рәхмәт әйтәһе урынға... - Тик күнегелгән "кәнтәй" һүҙен ысҡындырманы был юлы.

Бер аҙҙан тышта иҫерек йырлау, тағы ла: "Белка, кил әле бында, маһ-маһ!" тип саҡырған тауыш ишетелде.

Иртәнсәк илаш-ҡысҡырышҡа һиҫкәнеп уянып китте. Тиҙ генә кейенә һалды ла ишек алдына сыҡты. Баланы имеҙеүсе һәм актриса төп өйҙөң күтәрмәһенә баҫҡандар ҙа ҡулдары менән кәүҙәләрен ҡосоп ҡоттары осҡан йөҙ менән келәттәр теҙмәһе эргәһендәге эт ояһына текәлгәндәр. Унда ҡоласын йәйеп салҡан йығылған хужа ята. Муйыны тапҡырында ашъяулыҡ ҙурлыҡ ҡан йәйелгән.

Был ҡот осҡос күренештән юғалып ҡалған Дилемма үҙенең ни ҡылғанын да аңғармай ҡул аяҡтары тырпыраған мәйет эргәһенә яҡынланы. Асыҡ алһыу ҡан табы шулай уҡ аҡ футболканы тотошлайы менән ҡыҙыл төҫкә мансыған, сал сәстәргә яғылған. Ваҡ бураҙналар булып ҡартлыҡ һырҙары сыбарлаған йөҙ ҡағыҙҙай ағарған, хатта ҡан һауған күҙҙәр күкшелләнеп, сафланып ҡалғандар һымаҡ, улар донъяға асыулы түгел, был ни көтөлмәгән хәл булды әле, тигәндәй аптырап, һораулы ҡарайҙар. Йомро баш артҡа ташланғанғамы дүрткел эйәк юғарыға ҡалҡҡан, муйын тапҡырында тәрән яра эҙе ярылып күренә. Ярылып ҡына ҡалмай, сәйнәп өҙөлгән ҡурылдай ағарып өңөрәйгән. Теге өнһөҙ хеҙмәтсе ултырғыс ҡуйып хужаның баш осонда ултыра. Уның битлеккә тартым, хистәр ҡунмаған йөҙө тыныс, хатта ҡайһылыр кимәлдә битараф. Ситтән ҡарағанда ул мәйеттең күҙҙәрен суҡырға йыйынып уңайлы мәлде аңдыған ҡоҙғондо хәтерләтә. "Үлгәндәрҙең күҙҙәрен йомдоралар ҙа, бынау телһеҙ шул йоланы ла белмәйме икән ни!.." Ары мейеһен ҡурҡыныс уй ярып үтте: "Белка башыңа еткән бит һинең, ул үсен алған!" Ысынлап та, гел ояһы аяуыҙында ятҡан эт ҡайҙалыр юҡҡа сыҡҡайны. Бәлки, ул ҡурҡышынан өңө төбөнә йәшенгәндер. Дилемма ҡарашын юғарыға күсергәйне ҡарсыҡ ятҡан бүлмә тәҙрәһендә таныш һынды шәйләне. Китсе, ошоғаса түшәктәге хәрәкәтһеҙ ауырыу аяғына баҫһын сәле! Ҡарсыҡ сарғаланмай ҙа, сәбәләнмәй ҙә, таш балбалдай ҡатҡан да улына төбәлгән. Ҡарашында һыҙланыу һәм тәрән хәсрәт. Яҙмыш сығарған хөкөмдө алдан белгән, уны кисереп күп тапҡырҙар күңеле аша үткәргән кеше генә шулай ҡарай алалыр моғайын...

Кис еткәс, Дилемма тупһа ауыҙына ултырҙы ла өйҙәренең телефон номерын йыйҙы. Бер аҙҙан сымдың теге осонда өләсәһенең хәлһеҙ тауышы ишетелде:

- Тыңлайым...

- Өләсәй... был мин шылтыратам...

Теге оста ҡыуаныслы ауаз яңғыраны:

- Балам, бәпесем, һинме был? Алланың ҡөҙрәте, табылдың бит. Әйтә һал, ҡайҙаһың? Ә мин әллә нимәләр уйлап бөттөм.

- Минең өсөн борсолмағыҙ. Уйлап бөттөм, тиһең, ә... ҡартатайым ҡайҙа?

- Ул гүр эйәһе инде балам. Миңә лә уның артынан ҡалмай эйәрергә ине лә бит, һине кемгә ҡалдырам? - Яҙмышына үҙе генә хужа кешеләй өҫтәне. - Шуға кисектерҙем үлемде!

Ары ни әйтергә белмәгән Дилемма биниһая ваҡыт өндәшмәне лә ғәйебен танығандай әйтте:

- Ғәфү ит, өләсәй... Йыраҡта, бик йыраҡтамын. Әгәр риза булһаң, ҡайтам... Тәүбәгә килдем, аңланым, миңә бары һеҙ генә кәрәкһегеҙ...

- Нишләп кенә риза булмайым ти, ҡайт, көтәм. Ҡайтыуыңа бәлеш бешереп ҡуйырмын. Яратҡан бәлешеңде.

- Рәхмәт... тағы бер үтенесемде, үтә зинһар.

- Әйт кенә!

- Иртәгә үк балалар табыу йортона бар ҙа белеш, улымды ҡайҙа оҙатҡандар икән, приютҡамы, әллә берәй икенсе урынғамы? Тап та алып ҡайт, уны күргем, бала имеҙгем, әсә булғым килә, өләсәй!..

Сымдың теге осо тынып ҡалды.

- Нишләп өндәшмәйһең?

- Һуңланыҡ шул... Һин киткәс тә баланы биреүҙәрен һорап унда барғайным да. Өлгөрмәнем. Алып киткәндәр. Уллыҡҡа, тәрбиәгә алғандар тинеләр. Яҡшы ғаиләгә эләкте тип тынысландырған булдылар йәнә... Бала өсөн матур ғаилә атайлы-әсәйле йортта ғына инде ул...

Дилемманың телефон тотҡан ҡулы сыбыртҡылай һалынып төштө. Ул илап ебәрҙе. Асырғаныулы сеңләү таш ҡоймаларға, тимер ишектәргә ҡаҡлыҡты ла һыйып тора алмай ҡарағусҡылланған Йыһан көмбәҙенә ҡарай осто, эңер юрғанын һиҫкәнеүле тирбәлтеп йоҡоға йыйынған донъяны уятты. Уға яҙаһын көттөрөп рәшәткә эсенә бикләнгән эттең үҙәк өҙгөс олоуы ҡушылды.




**(Аҙағы. Башы 40-44-се һандарҙа).**

✓ *Таныштарымдың күбеһе бер генә башҡорт гәзите лә, журналы ла алдырмай. Ғәрлегеңдән йығылып китмәле бит был хәл! Мәсәлән, ярты йылға ни бары 550 тәңкә торған был гәзиткә аҡсаларын йәлләгән милләттәштәргә аптырайым.*



АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




# БАЙМАҠ МӘҘӘКТӘРЕ

**Был юлы беҙгә үҙенең лаҡаптарын Баймаҡ районы Темәс ауылында йәшәүсе Ринат Мөжәуир улы Мәксүтов һөйләне. Ринат Мөжәуир улы оҙаҡ йылдар совхозда механик, тракторсы булып эшләне. Уның менән булған ҡыҙыҡ хәлдәр ҙә башлыса ошо өлкәнән - ауыл хеҙмәтсәндәре тормошо менән бәйле. Үҙенең тамырҙары тураһында һөйләүемде һорағас, ул атаһының әсәһе данлыҡлы Буранбай сәсәндең вариҫы булыуын әйтте һәм: "Тамырҙар тураһында һөйләһәң дә, көлкө килеп сыға инде", - тип, эстәлеге тәүге көләмәс булып яңғырар тарихты һөйләп ишеттерҙе.**

### Ҡырҡ беренсе...

Борон заманда, әле аралар булмаған саҡта, Байым ауылында бер төркөм һунарсы егеттәр урмандан 40-лаған ят йәнлек ҡыуып алып ҡайтҡан. Табышты бөтөн ауыл халҡына тигеҙ бүлеп, һуйып ашағандар. Ҡыуып алып ҡайтылған йәнлектәрҙән бер ата йәнлектең ҡасып китеүенә әллә ни әһәмиәт биреүсе булмаған. Бер заман урмантауҙар аша ятҡан Кананикольск тигән урыҫ ауылынан бер нисә кеше килеп төшкән. Юғалған сусҡаларын эҙләп йөрөйҙәр икән былар. Ата сусҡа эҙенән килгәндәр. Килгәндәр ҙә, үҙҙәре башҡортса белмәгәс, ым-ишаралап аңлатып ҡарайҙар - бәйләнеш килеп сыҡмай ҙа ҡуя икән. Шул саҡ башҡорттар араһынан 25 йыл батша гәскәрендә хеҙмәт итеп ҡайтҡан бер ҡарт урыҫтарҙы аңлап ҡалған һәм ауылдаштарына: "Һеҙ сусҡа һуйып ашағанһығыҙ бит", - тип әйтеп һалған. Ят йәнлектәрҙе һуйған саҡта ул ҡарт, моғайын, ситтәрәк йөрөгәндер инде. Юғиһә, урыҫтар араһында йөрөгән кеше, моғайын, был "ят" йәнлекте таныр ине. Был хәбәрҙе ишеткән күптәр ҡоҫоп ебәргән, бөтәһе лә бысаҡтарын көл менән ышҡып, йыуырға тотонған. Мосолмандарға сусҡа итен ашау ярамай икәнен белгәндәр бит инде улар. Ошо хәлдән һуң Байым ауылына "ҡырҡ сусҡа" ҡушаматы йәбешкән. Был ҡушамат ара исеменә әйләнгән. Хәҙер ситтә ике байым осрашһа, бер береһенә, мәрәкәләп: "Ҡырҡ беренсе сусҡа, һаумы", - тип сәләм бирәләр.

### Тәҙрәңде бир әле...

Тракторымда "Һәүәнәк" совхозы баҫыуынан ҡайтып барышлай, бесәнен тырматырға ярҙам итәйем, тип, Фәрит Усмановтың бесәнлегенә барып туҡтаным. Фәриттең кинйә улы Азаматтың теле асылған ғына саҡ. Совхозда минән башҡа күҙлек кейеүсе булмағанға күрәләр, бәләкәй малайҙың күҙлек тигән нәмәне тәү күреүе икән. Ул бер атаһына, бер миңә ҡарап торҙо-торҙо ла: "Апа (диалект һүҙе, атайҙан өлкән ир кешеләргә ҡарата әйтелә), тәҙрәңде бир әле, мин дә кейеп ҡарайым", - тигән булды. Был лаҡап әле лә йөрөй. Мине күрһәләр, егеттәр: "Апа, тәҙрәңде биреп тор әле", - тип, хәҙер ҙә шаяртып алалар.

### Эшкә сығаһым юҡ!

1973 йылда Чилиҙа хәрби түңкәрелеш булды бит инде. Коммунистик хәрәкәт лидеры Луис Корваланды судһыҙ-ниһеҙ ҡулға алған ваҡыт. Бөтә ил буйлап совет халҡы Корваланға теләктәшлек белдереп, йыйылыштар үткәрә. Баймаҡтағы АТП коллективы ла ошо маҡсат менән клубҡа йыйылған. Күптәр сәхнәгә күтәрелеп, ялҡынлы телмәр тотҡан. Бер мәл сәхнә түренә бер аҙ эсергә яратҡан слесарь бабай сығып баҫҡан да: "Чили нимә икәнен белмәйем, Луис Корваландың да кем икәнен белмәйем, әммә ул азат ителмәйенсә тороп, эшкә сығаһым юҡ!" - тигән, ти.

### Улар бит урыҫ түгел

Уҙған быуаттың 70-се йылдар аҙаҡтарында Темәс ауылының бер төркөм йәштәре мал ташый торған брезент көплә йөк машинаһы кузовына ултырып, туйҙан ҡайтып бара, ти. Баймаҡ юлында, әмәлгә ҡалғандай, машинаны ябай инспектор түгел - Мочалин фамилиялы ГАИ начальнигы үҙе туҡтатҡан. Кемеһе - бахмурҙан, кемеһе - йоҡоһоҙ төндән шаңҡыған "пассажирҙар" арба төбөнә ныҡыраҡ һырылған. Ни тиһәң дә, йөк автомобиле кузовына кеше ултыртыу фашланһа, водителгә эләгәсәген барыһы ла яҡшы белгән. Милиционер менән водитель араһында ошолай диалог булған, тиҙәр:

- Кого везешь? - тигән хоҡуҡ һаҡсыһы. Шаян водитель ағай:
- А, свиней, - тип яуаплаған.
- А почему не хрюкают? - тип һаман бәйләнә ти ГАИ начальнигы.
- А... Они же нерусские... - тигән шофер ағай.

Һуңғы һүҙҙәрҙе ишеткән Мочалин һиңы ҡатып көлә лә, кузовтың эсенә күҙ һалып: "Иди, езжай", - тип, быларҙы ҡайтарып ебәрә.

### Дөрөҫ әйтте!

Мочалин менән бәйле тағы бер лаҡап йөрөй беҙҙең арала. Бер заман ГАИ начальнигы Мочалин эскән килеш руль артына ултырып, хоҡуҡ һаҡсыларына тотолған, водитель танытмаһынан "ҡолаҡ ҡаҡҡан" бер төркөм эшсе егеттәрҙе клубҡа йыйған да, үҙе сәхнә түренә ултырып, ҡалғандарҙы тамаша залына ултыртып, берәмләп саҡырып, тегеләрҙән күпме араҡы эсеүҙәре тураһында һорап, имтихан ала башлаған. Барыһы ла "Йөҙ грамм ғына эскәйнем" йә "Ике йөҙ грамм ғына эскәйнем", ти икән. Мочалин барыһына ла: "Ҡабаттан килерһең", - ти ҙә, сығарып ебәрә икән. Бер заман бер оло ғына ағайға еткән сират. Һорау алыусының "Күпме эстең?" тигән һорауына ул: "Эй, күпме эскәнемде белгән булһам, бында эләкмәҫ инем" - тигән. ГАИ начальнигы: "Бына, ниһайәт, берәү дөрөҫөн әйтте. Мә, таныҡлығың", - тигән, ти.

### Беҙҙең һыу йомшаҡ!

Ауылдағы бер ағайға ҡаҙ өмәһенә ғаиләһе менән бажаһы килгән. Өмәнән һуң ирҙәр "байрам итеп" алған. Кисен ике бажа мунсаға инеп киткән. Хужа йыуынып бөткән дә, соланда бажаһын көтә, ти. Ә бажаһы сайына ла сайына, үҙе: "Ни эшләп үҙе ыуҙы һалҡын һыуға ҡойһам, күперә лә китә ул?" - тип аптырап һөйләнә, ти. Хужа кеше: "Был һинә ҡаланың татырлы һыуы түгел - беҙҙең һыу йомшаҡ ул!" - тип маһая, ти. Ул-был итеп, мунсанан килеп сыҡҡандар бажалар. Улар сығыуға, мунсаға ҡатындары киткән. Бер заман хужабикә тыҙынып, өйгә ҡайтып ингән дә, ирен әрләй башлаған: "Араҡы эсеүегеҙ етмәгән, хәҙер шампунға тотондоғоҙмо?" Хужа ни әйтергә лә белмәгән. Аҙаҡ асыҡланыуынса, кейенгән саҡта хужа яңылыш терһәге менән шампунды эсә һыу һаутына ҡолатып төшөргән дә, шуға эсә һыу шампунланган икән. Бажаларҙың "байрам итеүҙәре" лә шул самараҡ булғандыр инде, күрәһең.

### Кире боролорғамы ни?

Бер көн Фәхрислам Исҡужин (хәҙер ул мәрхүм инде) менән совхоз бесәненән ҡайтып киләбеҙ. Ул үҙ тракторы менән алдан килә, мин үҙемдекендә - арттан. Темәс бүлексәһенең асфальтына еткәйнек кенә, ҡаршыбыҙға прицеплы "Камаз" килеп сыҡты. Уттарын яндырып-һүндереп, беҙҙе туҡтаттылар. Фәхрислам тракторынан төшөп, тегегә ҡаршы китте. Бер заман көлә-көлә кире боролдо был. "Ни эшләй?" тиһәм: "Эй, бынау егеттәр Магнитогорск яғынан киләләр. "Ҡайҙа Билал ауылы?" - тип һорайҙар. Мин уларға: "Егеттәр, һеҙ уны үтеп киткәнһегеҙ бит", - тигәйнем, улар: "Нисә километрға үткәнбеҙ?" - тип һорайҙар. "Ун ике километрға", - тим. Улар: "Хәҙер нимә, беҙгә кире боролорғамы ни инде?" - тип аптырай төштөләр. Мин тоттом да: "Юҡ, егеттәр, арт менән барығыҙ", - тинем, ти. Шулай мәрәкәсел шул беҙҙең халыҡ!

### Был кемдең йоморҭҡаһы?

Бер көн тәмәке алырға тип, магазинға киттем. Барып инһәм, ҡатынҡыҙҙар сиратҡа баҫҡан. Һаулыҡ һорашым да, сират һуңына барып баҫтым. Бер мәл сиратта торған бер ханым, һатыуға ҡүйылған бер һауыт йоморҡаға ымлап: "Был кемдең йоморҭҡаһы?" - тип һораны, ниндәй хужабикә алып килеп һатыуға ҡуйҙы икәнен белергә теләгәндер инде, күрәһең. Мин: "Кемдеке булһын - тауыҡтыҡы инде", - тип мәрәкәләмәк булдым. Теге ханым миңә бер ҡараны ла, алыр нәмәһен дә алмай, магазиндан сыҡты ла китте. Күптәр хәҙер юморҙы ауыр ҡабул итә шул.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ



# ТЕРЕ ҺЫУҒА САРСАҒАНДАЙ...

**Башҡортостанда тыумаһаҡ та, үҙебеҙҙе ситтә итеп тоймайбыҙ, сөнки боронғо башҡорт ере Силәбелә тыуып-үҫеп, белем алып, ғүмер буйы эшләп, шөкөр, һаман да тыуған төбәгебеҙгә кәрәк булып, ошондағы ерҙәштәребеҙ - күп һанлы милләттәштәребеҙгә терәк булып, йәшәп ятабыҙ әле.**

Оҙаҡ йылдар мәктәптә уҡытып, хаҡлы ялға сыҡһам да, алһыҙ-ялһыҙ йәмәғәт эштәрендә ҡайнайым. Быйыл беҙ Силәбе өлкәһе Сосновка башҡорттары ҡоролтайы ойоштороулоҙын 20 йыллығын тантаналы билдәләнек. Ваҡытында ирем, крайҙы өйрәнеүсе тарихсы Арыҫлан Абзал улы менән был эште башлап ебәреүселәрҙән булараҡ, ҡоролтай эшмәкәрлегенә күп көс һалырға, туған телен, нәсел тамырҙарын онотоп барған милләттәштәребеҙҙе үҙ асылына ҡайтарыу маҡсатында бик күп аңлатыу, ойоштороу эштәре башҡарырға тура килде. Бөгөн дә ошо юлдабыҙ. Шөкөр, ерҙәштәребеҙҙең үҙаң кимәле күпкә үҫеште, нығынды хәҙер. Был эштә беҙгә, әлбиттә, Башҡортостанныбыҙҙың ярҙамы ҙур булды. Яҙыусылар, артистар беҙҙә йыш ҡунаҡ, башҡорт телендәге гәзит-журналдарҙы алдырабыҙ, телевидение, радио тапшырыуҙарын да бик яратабыҙ, көтөп алабыҙ.

Гәзит-журнал, тигәндән, уларҙың күбеһен яҙҙырып алып уҡыйбыҙ, тик бына шуныһы йәл: иң яратҡан гәзиттәремдең береһе - "Киске Өфө" гә яҙыла алмайбыҙ: ул Рәсәй каталогына индерелмәгән. Шулай булһа ла, мин ошо гәзиттең бөтә һандарын да уҡып барырға тырышам. Әлбиттә, интернеттан уҡыу - ул таныҡты ҡандыра торған шөғөл түгел инде, ҡулыңа тотоп, ала-һала "тәмләп" уҡымагас... Шуға күрә үҙем йә ирем Өфөгә барғанда уны ҡосаҡ-ҡосаҡ итеп алып ҡайтып, яҡташтарыбыҙға таратабыҙ, төпләмәһен алып барабыҙ. Йомош-юл йөрөүселәр ҙә белеп ҡалды хәҙер, беҙ бара алмағанда, гәзитте улар алып ҡайтып ҡыуандыра. "Киске Өфө" - тап беҙгә кәрәкле гәзит, сөнки унда халҡыбыҙ тарихы һәм йолаларын яҡтыртыуға ҙур урын бирелә; башҡорт халҡының мәшһүр тарихи шәхестәре, бөгөнгө замандаштар хаҡында даими яҙыла. "Киске Өфө" аша беҙ туған тел, рухи хазиналарыбыҙ хаҡында ла бик күп мәғлүмәттәр алабыҙ. Әле бына һуңғы һандарҙа Башҡортостанда күн йәйелеп киткән ағинәйҙәр хәрәкәте тураһында кинәнеп уҡыйбыҙ һәм үҙебеҙҙә лә ошо йәмғиәтте булдырыу буйынса эш башлап ебәрҙек. Башҡортостанда йәшәгән милләттәштәребеҙгә ҡарата көнләшеү тойғоһо ла, үпкә лә тыуып ҡуя: әсә телебеҙҙә бөтөн китаптарҙы, телгән гәзит-журналдарыбыҙҙы бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ алдырып уҡырға мөмкинлектәре бар, театр-концерттарға, музейҙарыбыҙға йөрөргә була - бөтөнөһө фәҡәт улар ихтыяры һәм теләгендә. Тик ана шул рухи хазиналарыбыҙҙың урын-ерендә ҡәҙере булмауы аптырата ла, эсте лә бошора. Минең Башҡортостандағы таныштарымдың күбеһе бер генә башҡорт гәзите лә, журналы ла алдырмай. Ғәрлегеңдән йығылып китмәле бит был хәл! Мәсәлән, ярты йылға ни бары 550 тәңкә торған был гәзиткә аҡсаларын йәлләгән милләттәштәргә аптырайым. Ә беҙ, ситтәгеләр, тап ана шундай хазиналарыбыҙға тере һыуға сарсағандай һыуһап йәшәйбеҙ...

**Рабиға БИКБУЛАТОВА.**
**Силәбе өлкәһе Сосновка районы.**

✓ "Ә һуң ул һүҙ дөрөҫ булһа?" - тигән Бәйғәмбәребеҙҙең иптәштәре. "Әгәр әйткән һүҙең дөрөҫ икән, һин - ғәйбәтсе, әгәр һүҙең ялған булып сыҡһа, һин - яла яғыусы булаһың," - тип яуап биргән Аллаһ илсеһе.



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘШЕЛЛЕК - сәләмәтлеккә юл

■ Кәбәгенән айыртылмаған ондан эшләнгән макарон изделиелары йөрәк сәләмәтлеген нығыта, тип белдерә Пиза университеты белгестәре. Бындай изделиелар йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлеген, шулай уҡ ҡан тамырҙарының яңы тармаҡтар (коллатералейҙар) ебәреүен әүҙемләштерә. Тап ошо тармаҡтар йөрәк туҡтаған осраҡта "ярҙамсыл юлдар" булып хеҙмәт итә лә инде. Һынауҙар ҡомаҡтарҙа үткәрелгән. Уларҙы ике төркөмгә айырғандар. Тәүге төркөм кәбәкле ондан яһалған һәм бета-глюканға бай макарон изделиелар менән туҡланған. Икенселәре ғәҙәти макарон ашаған. Һуңынан йәнлектәрҙең йөрәк эшмәкәрлеген мәжбүри рәүештә туҡтатҡандар. Бета-глюканға бай ризыҡ ашаусы ҡомаҡтарҙың был хәлдән һуң кире йәшәп китеү һәләте юғарыраҡ булып сыҡҡан. Бынан тыш, уларҙа миокард ныҡ зарарланмаған булып сыға.

■ Ҡара емеш файҙалы ризыҡ, тип раҫлай Америка тикшеренеүселәре. Сысҡандарҙы ике төркөмгә бүлеп, береһенә ҡара емеш ашатҡандар. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡара емеш эсәк яман шеше хәүефен түбәнәйтә. Ғалимдар быны ҡара емеш составындағы витаминдар, минералдар һәм антиоксиданттар менән аңлата. Былар барыһы ла яман шеш хәүефен түбәнәйтә. Шулай уҡ йәшелсә, емеш-еләк, ҡуҙаҡлылар, балыҡ, һөт продукттары, зәйтүн майы өҫтөнлөк иткән диета ла яҡшы.

■ Барселонала үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, урман эргәһендә йәшәүҙең ыңғай яҡтары күп. Бындай мөхиттә үҫкән балаларҙың хәтере яҡшыраҡ була. Һынауҙар 2003-2013 йылдарҙа дауам иткән һәм унда 1500 бала ҡатнашҡан. Йәшәгән өйҙәре эргәһендә ағастар үҫкән балалар тестарҙы уңышлыраҡ үткән. Белгестәр раҫлауынса, йәшел үҫемлектәр баланың баш мейеһе үҫеше өсөн мөһим. Улар тауыштан да һаҡлай, бындай ерҙә һауа ла сафыраҡ.

■ Һалҡын душ һыуыҡ тейеүҙән һәм киҙеүҙән һаҡламай, әммә һалҡын һыу менән ҡойонорға яратыусылар дауаханаға һирәк эләгә, ти ғалимдар. Һынауҙарҙа ҡатнашыусы 3000 кеше башта һалҡын һыу ҡойонғанда тыуған ҡайһы бер уңайһыҙлыҡтарға зарлана, әммә эксперимент аҙағына уларҙың 91 проценты үҙен яҡшы тоя һәм был шөғөлөн унан һуң да дауам итә. Иң ҡыҙығы, һалҡын һыу менән ҡойоноуҙың ыңғай тәьҫире нимәгә бәйле икәнен белгестәр һаман асыҡлай алмаған. Һалҡын һыу тәьҫирендә организмда бета-эндорфиндар бүленеп сыға. Һалҡын һыу энергия сығанағы ла.

■ Макс Планка университеты ғалимдары алты айлыҡ сабыйҙарға үрмәкселәр, сәскәләр, йыландар, балыҡтарҙың һүрәтен күрһәткән. Белгестәр балаларҙың күҙҙәренең ҡараһын күҙәткән. Билдәле булыуынса, күҙ ҡараһының киңәйеүе стресс гормоны - норадреналин кимәле күтәрелеүе күрһәткесе. Йылан йәки үрмәксе һүрәтенән балалар нығыраҡ ҡурҡҡан. Йылан менән балыҡ һүрәте араһында әллә ни айырма тойолмаған, шулай уҙа йылан һүрәтенә ҡараған саҡта күҙ ҡараһы нығыраҡ киңәйгән. Ғалимдар әйтеүенсә, үрмәксе менән йыландан ҡурҡыу - эволюцион механизм. Ул беҙҙең ата-бабаларға һаҡланып ҡалыу мөмкинлеге биргән - хәүефле йәнлектәрҙән йырағыраҡ торорға этәргән.

СИТ ИЛДӘРГӘ БАРЫП...

**"Атаң барҙа ир таны, атың барҙа ер таны", ти халыҡ мәҡәле. Ысынлап та, мосафирлыҡ беҙҙең милләткә хас күренеш. Тик төрлө дәүерҙә ул төрлөсә сағылыш таба. Әгәр беҙҙең ата-бабаларыбыҙ һыбай атланып, меңәр саҡрым юлдар үтеп йөрөй торған булһа, замандаштарыбыҙ инде автомобилдәрҙә, самолеттарҙа, караптарҙа киңлектәр яулап, ер-һыу танып йөрөйҙәр. Сәфәр рухы минең дә күңелемде ситләтеп үтмәне һәм мин йылдан-йыл донъяның ҡыҙыҡлы һәм матур урындарын аңымда беркетелгән картала асыҡлап барам.**

# БАЛҠАН ИЛДӘРЕ МЕНӘН ТАНЫШТЫМ...



Шулай итеп, көҙҙөң йәмле бер мәлендә күптән инде уйҙарымды арбаған Балҡан ярымутрауы илдәренә юл тоттом. Был сәйәхәттә миңә Албания, Босния һәм Герцеговина, Македония, Сербия, Черногория илдәре менән танышырға насип булды. Ике самолет алыштырып, Адриатик диңгеҙ ярына барып төштөм, ә артабанғы хәрәкәт өсөн классик ысулды - автостопты һайлап, урыны менән автобус һәм тимер юл транспортын да ҡулланып, дөйөм алғанда 3200 саҡрым юл үттем. Йоҡлар өсөн туҡтаған урындар ҙа бербереһенән ныҡ айырылып торҙо, бер нисә мосафирхана, тәбиғәт ҡосағында ойошторолған йәйләүҙәр, урындағы халыҡ, сит илдә йәшәүсе яҡташтар һәм бер мәсет миңә был сәфәрҙә торлаҡ бүлде. Аш-һыу яғынан да миңә, тормошҡа ябай ҡараған юлсыға, еңелдән тура килде, ваҡыты менән үҙем әҙерләп тамаҡландым, ашханаларға ла инеп сыҡтым һәм дә урам ризығынан да баш тартаманым - уныһы инде иҫтә нык ҡалғаны: "бурек" тигән эремсек бөлеше, бар илдәр өсөн уртаҡ ашамлыҡ һәм ағас-ҡыуаҡтарҙа бешеп еткән емештәр.

Сәфәр өсөн юҡҡа ғына был илдәрҙе һайламаным, беренсенән, улар үҙҙәренең билдәһеҙлеге менән ҡыҙыҡһыныу уятты; икенсенән, ул илдәргә барыу өсөн беҙҙән виза талап ителмәй; өсөнсөнән, был илдәрҙә сәйәхәт итеү ҡыйбатҡа төшмәй - ҡыҙыҡлы һәм мажаралы сәйәхәт өсөн был иң мөһим шарттарҙың береһе.

Әйткәндәй, ул илдәр сағыштырмаса яңы дәүләттәрҙән һанала. Югославия тарҡалғандан һуң үҙаллы тормош башлап киткән Черногория һәм Македония - бынан бер нисә йыл элек кенә туризм ярҙамында нығлап аяҡҡа баҫа башлаған илдәр. Элекке көслө дәүләт үҙәге булған Сербия бөгөнгө көндә етемһерәгән һымаҡ күренһә лә, иҡтисад яғынан туғандаш илдәренән юғарыраҡ кимәлдә. Ә Босния һәм Герцеговина һаман әле 22 йыл элек тамамланған 44 айлыҡ граждандар һуғышынан һуң һушына ҡайтмаған кеүек. Албанияға килгәндә, ул бөтөнләй башҡа. Ул 90-сы йылдарға тиклем диктатор Энвер Ходжа етәкселегендә бар донъяға бикле дәүләт булып дан алған, һәм унан һуңғы йылдар ағымында Европала иң хәүефһеҙ ил тип иҫәпләнгән, бөгөнгө көндә үҙенең ҡунаҡтары өсөн хозур тәбиғәтен һәм халҡының киң күңелен асҡан.

Төрлө быуаттарҙа Балҡан ере төрлө дәүләттәр биләмәһе булып торған: Бо-

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ҺАҠСЫ БУЛ!



**Ғәҙәттә, ниндәйҙер булмаҫтай хәбәр, ғибрәтле хәл тураһында ишеткәндә, "Әстәғәфирулла!" ти һалабыҙ. Йәғни беҙ, атеистик рухта тәрбиәләнгән совет осоро балалары, "Әстәғәфирулла" һүҙен ғәжәпләнеү, аптырау, шул уҡ ваҡытта тыңлаусының был хәбәргә бик үк ыңғай булмаған мөнәсәбәтен дә белдереүсе һүҙ, тип ҡабул иткәнбеҙ.**

Әммә был һүҙҙең мәғәнәһе бүтәнсәрәк. Ул ғәрәп һүҙе, беҙгә Ислам дине менән бергә килеп ингән. "Мин Аллаһтан ғәфү итеүен һорайым", тигәнде аңлата. Хәтеремдә: бәләкәй сағымда өләсәйемдең тиҫбе тотоп, ауыҙ эсенән "Әстәғәфируллаһ" тип ҡабатлап ултырғанын ишетеп, бик ғәжәпләнгәйнем. Баҡһаң, ул шулай зекер әйтеп ултырған икән - хәҙер генә аңлайым.

Ә ни өсөн кеше ғибрәтле хәл, ғәйбәт ишеткәндә "Әстәғәфирулла" тип Аллаһы Тәғәләнән ғәфү үтенгән? Баҡһаң, Аллаһ ҡаршыһында иң оло гонаһтарҙың береһе - ғәйбәт икән. Иң мөһиме - ғәйбәтте һөйләүсе генә түгел, тыңлаусы ла шундай уҡ гонаһҡа бата. Шуға күрә, ғәйбәт ишетеү менән иманлы әбей-бабайҙарыбыҙ: "Ҡолағым ирекһеҙҙән ғәйбәт ишетте, мине ғәфү ит, Аллам", - тип, тиҙерәк китеү яғын ҡараған.

Ә нимә һуң ул ғәйбәт? Бер ваҡыт бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһии үә сәлләм сәхәбәләренән: "Ғәйбәттең нимә икәнен беләһегеҙме?" - тип һораған. "Аллаһ һәм уның рәсүле белә,"- тип яуаплаған сәхәбәләр. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Ғәйбәт ул - мосолман туғаның тураһында уның артында уға оҡшамаған һүҙ әйтеү". "Ә һуң ул һүҙ дөрөҫ булһа?" - тигән Бәйғәмбәребеҙҙең иптәштәре. "Әгәр әйткән һүҙең дөрөҫ икән, һин - ғәйбәтсе, әгәр һүҙең ялған булып сыҡһа, һин - яла яғыусы булаһың," - тип яуап биргән Аллаһ илсеһе.

Ошо хәҙисте уҡығас, сәсем үрә торғайны, сөнки мин үҙемдең... ғәйбәтсе икәнлегемде белдем. Башҡа гонаһтар ҙа баштан ашҡан, инде быныһы... Тураһын әйтергә кәрәк: кеше һөйләргә яратабыҙ. Эргәндәгеләр кемделер һөйләй башлаһа, ҡолаҡ ҡарпая, ҡушылырға телең ҡысытып ҡына тора. Шул көндән башлап телде тыйырға, ҡолаҡты һаҡларға үҙемә һүҙ бирҙем. Ай-һай, еңел түгел икән үҙ-үҙеңә һаҡсы булыу... Әммә башҡа юл юҡ. Сөнки ғәйбәтсе йәһәннәм утына ташланасаҡ, ти Аллаһы Тәғәлә "Һөмәзә" (ғәйбәтсе) сүрәһендә. Кемдең һуң утта янғыһы килһен!

Ҡөрьәндә йәнә былай тиелә: "...бер-берегеҙҙең ғәйбәтен һатмағыҙ. Кем үлгән туғанының итен ашарға теләр? Ерәнәһегеҙ бит унан. Аллаһтан ҡурҡығыҙ. Аллаһ тәүбәне ҡабул итә. Ул рәхимле".

Аллаһы Тәғәләнең Әл-Ғаффар, Әл-Ғафур тигән гүзәл исемдәре бар. Йәғни ғәфү итеүсе. Тик кешенең тәүбәгә килеүе шарт. Шуға күрә "Әстәғәфируллаһи тәүбә", тип, беҙҙе бар итеүсе Бөйөк Раббыбыҙҙан ярлыҡау һорайбыҙ. Беҙҙең был донъяла белеп һәм белмәй ҡылған гонаһтарыбыҙҙы кисер, доғаларыбыҙҙы ҡабул ит, йә Рабби.

**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

ронғо Греция, Рим империяһы, Осман империяһы, Австро-Венгрия империяһы, Көнсығыш блок. Бында һәр береһенән боронғо амфитеатрҙар, таш ҡалғаләр, мәрмәр биналар һәм панелле йорттар рәүешендәге мәҙәниәт һәм архитектура ҡомартҡылары ҡалған.

Сәфәрҙәремдә мин мотлаҡ рәүештә урындың тарихы менән танышырға тырышам, сөнки тарих бөгөнгөнө аңлау өсөн кәсле ҡорал. Һәм нисәмә быуаттар буйына боролоп, сырмалып аҡҡан тарих, һис шикһеҙ, әлеге замандa шул урында йәшәгән халыҡҡа барып тоташа. Шулай итеп, кешелек бар донъяның иң ҡиммәтле ҡомартҡыһы булып сыға.

Юлымда минә, әлбиттә, кем менән генә аралашырға тура килмәне, һәр береһе иҫемдә ҡалған кеүек һәм ҡайны берҙә донъялағы бар халыҡ менән танышып сығырға мөмкиндәр, тигән уйҙар ҙа килә башҡа. Бәлки, был тормоштоң ысынбарлығын аңларға ярҙам итәлер кеше затына, бәлки, шуға күрә лә сәйәхәттәр күп кешегә тынғы бирмәйҙер.

Ҡасандыр мин бер дуҫымдан ҡыҙыҡлы фараз ишеткәйнем: һәр милләтте айырым организм итеп ҡабул итергә була һәм, әлбиттә, милләттең һәр вәкиле үҙаллы шәхес булып торһа ла, унда милләттең күпселек һыҙаттары сағылыш табасаҡ. Шуға күрә, аҙаҡҡы сәфәремдә күргән илдәрҙең һәр береһен үҙенә күрә айырым һыҙаттарға эйә булған кеше заты тип тасуирларға ҡыйыулыҡ итеп ҡарайым әле.

**Македония**, мәҫәлән, үҙ көсөнә артыҡ ышанып етмәй йәшәгән "үсмерҙәй" булып, ҡояш аҫтында үҙ урынын аҡрынлап килеп тапҡан "зат". Тарихтан билдәле булыуынса, теләнең дә үҙаллы булып иҫәпләнә башлауына бик күп ваҡыт үтмәгән. Эргә-тирәләгеләр эткеләп-төрткөләп, талап маташыуына артыҡ иғтибар бирмәгән, үҙ яйына шым ғына хәрәкәт итеп йөрөгән берҡатлыраҡ талип булып, археология факультетын тамамлап, бөгөнгө көндә үҙ эшен күрһәтеп танала башлаған белгескә оҡшаған ул. Ҡайһы бер күршеләре уның исемен ят итһәләр ҙә, ысулдарын табып, барыһы менән килешеп йәшәп, үҙенә ҡыҙыҡһыныуҙы йылдан-йыл арттыра бара был Македония исемле "йәш егет".

**Сербия, Босния һәм Герцеговина, Хорватия** (үҙе менән танышып өлгөрмәнем әле, әммә апайҙарынан күп ишеттем) исемле "ҡыҙҙар" һәм "ҡустылары" Черногория - бер туғандар. Былар бала саҡтарынан барыһы ла бер телдә һөйләшәләр, шуға бер-береһен бик яҡшы аңлайҙар. Тик ҙурайып, дүртеһе дүрт төрлө урында төпләнеп йәшәп киткәс, телдәре диалектик үҙгәрештәр кисергән, йәғни кемеһе кем икәнен айырыр өсөн телдәренә ябай үҙенсәлектәр индергәндәр. Черногория рәхәтләнеп Адриатик диңгеҙе буйында ҡыҙынып ята, емеш-еләк ашай, тауҙар гиҙә, ҡунаҡ ҡабул итә һәм күрһәткән хеҙмәттәре өсөн килем алырға ла бик әүәҫ - был һыҙатты инде ул "апаһы" Хорватиянан өйрәнеп алған. Кемдер Черногорияны енел холҡло тип тә иҫәпләйҙер, бәлки, сөнки артыҡ бер ни хаҡында бошонмай. Кесе булыуына күрә, "апайҙарының" иҙгыштарына ҡыҫылмайынса, киләсәккә яҡты өмөттәр һәм ҡыйыу пландар менән тыныс ҡына йәшәп ятҡан "егет" ул Черногория. Сербия иң олоһо, һәм ул барыһынан да үҙ һүҙен тыңлатып өйрәнгән. Ғаилә тотҡаһы, ғөрөф-ғәҙәт һаҡлаусы, тәмле-тәмле аш-һыуҙар бешереүсе, балаларға бик иғтибарлы, үҙенә ҡарата ғәҙелһеҙлекте кисерә алмай торған "оло апай". "Оло апай" Босния һәм Герцеговинаны үҙаллы тормошҡа ебәрергә теләмәйенсә, ыҙғыш барышында уларға күп кенә яра һала, һәм Босния һаман әле әрнеүҙәренән йүнәлеп бөтмәгән кеүек. Өҫтәүенә, Хорватия "һеңлеһе" лә был ғаилә конфликтына ут өҫтәп ебәрә. "Апаларына" үсегеп, ситтән килгән ярҙамды ҡабул итеп, туғандары менән мөнәсәбәттәрен көскә яйға һалып ала, һәм һаман да аңлайышһыҙлыҡтарҙан тулыһынса үҙҙәрен азат итмәгән улар. Шуға күрә, Босния һәм Герцеговинаның сифаттарына килгәндә, бик күпте күрергә була. Кешегә тәү сиратта артыҡ ышанып бармай, һәм өйрәнергә ваҡыт талап итә, әммә ҡабул иткәндән һуң, ул бик ҡунаҡсыл, асыҡ һәм киң күңеллелек күрһәтә. Ҡабул иткән ҡунаҡтары менән ул бар тормошо, яҙмышы һәм булмышы менән бүлешергә ынтыла. Кешеләр яғынан иғтибарға һәм тоғро мөнәсәбәткә хаҡ бирә.

**Албания.** Күнелемдә иң йылы хәтирәләр ҡалдырған ил, "өләсәйҙәр" менән генә сағыштырырлыҡтыр уны. Ул ниндәйҙер боронғо телдә һөйләшә һәм уны берәү ҙә аңламай. Күнеле шул тиклем ихлас һәм киң, өйөнә ингән бер кешене йылы ҡараш менән ҡаршы ала, өҫтәл янында ултыртып, шунда уҡ хәстәрләй башлай. Үҙенең хәлдәрен һөйләгән арала ейәндәренең хәлен дә белешә, өләсәләрен һағынғандармыюҡмы тип, оҙаҡҡа килделәрме, тип һораша. Барыһы ла уның өйөндә үҙен иркен һәм уңайлы хис итеүен теләп, быныҡ өсөн барлыҡ шарттар булдырырға тырыша. Оҙатып ҡалғанда иһә һағышын йәшермәй, моңайып та китә кеүек. Әлбиттә, ҡабат килеүҙе һорай һәм, ысынын ғына әйткәндә, бындай ихласлыҡ менән ҡарағандарға нисек "юҡ" тип әйтергә мөмкин...

Был илдәрҙәге яҡшы кешеләр менән танышыу минең күңелдә бик сағыу тәҫьораттар ҡалдырҙы һәм бындай мөмкинлек килеп сығыуына мин, әлбиттә, шатмын. Әйткәндәй, улар ҙа миңә ҡарата бик ҙур ҡыҙыҡһыныу белдерҙе. Бигерәк тә минең сығышыма. Сөнки ғүмерҙәрендә лә Башҡорт иле тураһында ишеткәндәре булмаған. Үҙебеҙ менән яҡыныраҡ таныштырыр өсөн мин күстәнәскә алған бал менән барыһын да һыйларға тырыштым, милли орнамент менән ҡулдан сигелгән ҡулъяулыҡтар ҙа тараттым, бүләшә алған тиклем тарих тураһында, милли кәсептәребеҙ хаҡында, айырыуса башҡорт аты тураһында, тәбиғәтебеҙ, ғөрөф-ғәҙәттәр, көнкүрешебеҙ тураһында ла һөйләнем һәм йыр-моң менән бүлешеп, халыҡ йырҙарын йырлап ишеттерҙем.

Ер-һыу таныу, донъя менән аралашыу һәр ваҡыт ҡара-ҡаршы бара. Рухи байлыҡ менән бүлешкәндәргә, шуның менән уҡ яуап ҡайтарғанда ғына, кешеләр араһында ышанырлы һәм тоғро мөнәсәбәттәр тыуыуы мөмкин. Кешелектең маҡсаты бер - татыулыҡ. Һәм тәү сиратта беҙ үҙебеҙ менән татыу мөнәсәбәттә булһаҡ, беҙҙе ураҡкан был ғәжәп донъя менән дә татыулыҡҡа инеү мөмкинлеге асылыуында һис тә шик ҡалмаҫ.

Донъяны аңлар өсөн сәйәхәт иң яҡшы һәм хәүефһеҙ ысул. Һәм ата-бабаларыбыҙ ерҙәр гиҙеп, Башҡорт иленең данын ҡитғаларға тараткан икән, бөгөнгө көндә лә беҙгә көс-ғәйрәт, рух байлығын арттырыуҙа сәфәрҙәр булышлыҡ итә.

**Денис ӨМӨТБАЕВ.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ҺАРЫМҺАҠ ҠАБЫҒЫ...

## йәшлекте оҙайта



**Һарымһаҡ таҙартҡанда уның аҡ ҡабығын ташламайынса, киптереп, йыйып барығыҙ. Ул йәшлекте оҙайтыуҙың ҡиммәтле сараһы. Бының өсөн ай һайын ошо һарымһаҡ ҡабығынан әҙерләнгән эсемлек эсергә кәрәк.**

Бер ус ҡабыҡты алығыҙ ҙа, уға ҡайнар һыу ҡойоғоҙ. Төнәтмәне эсе йәки йылымыс килеш түгел, һыуығас, йәғни 6-8 сәғәттән һуң эсергә мөмкин. Бер көндә 4 стакан төнәтмә ҡабул итергә кәрәк. Оҙаҡ һыуынғанлыҡтан, уны алдан әҙерләп ҡуйырға мөмкин. Ир-ат был эсемлекте теләһә ҡайһы айҙың 10-20-се көндәрендә эсһә, ҡатын-ҡыҙҙарға 20-һенән 30-на тиклем эсеү кәрәк. Бер аҙҙан тирегеҙҙең күҙгә күренеп матурайғанын тойорһоғоҙ.

Һарымһаҡ ҡабығында ниндәй дауалаусы матдәләр бар? Әгәр һарымһаҡ тәнкәләрен алып, уны микроскоп аша ҡараһаҡ, рәт-рәт булып ятҡан кверцетин кристалдарын күрербеҙ. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, һарымһаҡ һәм һуған ҡабығында 4 процент антиоксидант, бифлавоноид - кверцетинин бар. Тәбиғи биологик актив был матдә Р витамины төркөмөнә ҡарай. Ул шулай уҡ алмала ла бар. Кверцетин күбеҙегә юғары дозаларҙа талап ителгәнлектән, уны көн һайын барлыҡ сығанаҡтарҙан да алырға кәрәк. Билдәле доктор Аткинс кверцетинды иң яҡшы антигистамин сараһы тип һанаған һәм төрлө формала аллергия менән яфаланыусыларға тәҡдим иткән. Әммә күпселек табиптарға ул йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын иҫкәртеү сараһы булараҡ билдәле. Кверцитинды күпләп ҡулланыусыларҙа инфаркт һәм инсульт хәүефе, тромб барлыҡҡа килеү ҡурҡынысы кәмерәк.

Һәм тағы. Ғалимдар бынан 5 мең йыл элек тапҡан таблицкаларға яҙған боронғо Ҡытай гомеопатия сараһын бөгөн һәр кем эшләй ала. Был сара организмды майҙарҙан, насар холестериндан һәм эҙбиз ултырмаларынан таҙарта, матдәләр алышыныуын яҡшырта, тамырҙарҙы һығылмалы итә, миокард инфарктынан, стенокардиянан, склероздан, төрлө шештәр барлыҡҡа килеүҙән аралай. Шулай уҡ уны ҡулланғандан һуң баш ауыртыуы, ҡолаҡ шаулауы бөтә, күҙҙәр яҡшыраҡ күрә башлай. Һәм быларҙың барыһы ла һарымһаҡтан эшләнгән төнәтмә менән бәйле. Әгәр уны рецепт буйынса эшләп, даими ҡабул иткәндә, организмығыҙ мотлаҡ йәшәрәсәк. Бының өсөн урта дәүмәлдәге һарымһаҡты таҙартырға, яҡшылап йыуып, ҡайнар һыу менән бешекләргә кәрәк. Лимонды әрсеп, һарымһаҡ менән бергә блендерҙа ваҡлағыҙ. Барлыҡҡа килгән массаны быяла һауытҡа һалып, 600 грамм ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға һәм һауытты ябып, төнәтмәне 3-4 көн һыуытҡыста тоторға. Һуңынан уны һарҡытып, өс ай дауамында иртән ас ҡарынға 50 грамлап эсергә кәрәк. Тәнәфес булмаһын өсөн төнәтмәне алдан эшләп ҡуйыу зарур. Өс айҙан һуң бер ай ял итергә һәм тағы ла өс ай эсергә.

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Әгәр хыялымды тормошҡа ашырырға мөмкин булмаһа?

Кешеләр аңға һыймаҫ ҡаһарманлыҡтарға һәләтле. Мәҫәлән, американлы Роджер Кроуфордты алайыҡ. Ул һыңар аяҡлы була, ике ҡулының да бармаҡтары юҡ. Шуға ҡарамаҫтан, профессиональ теннисссы булыуға өлгәшә. Дөрөҫөрәге, профессиональ спортсы статусын алып, тренер булып эшләй башлай. Үҙенең тормошон "Играя всем сердцем" тип аталған китабында яҙа. Ошо кешегә ҡарап, аҡланыуҙар хаҡын аңлайһың да инде.

Хыялдарын ысынбарлыҡҡа әйләндереүгә өлгәшеүселәрҙең бер уртаҡ һыҙаты бар: уларға бик йыш тормош төпкөлөнән сығырға тура килә. Астма менән ауырыусы өмөтһөҙ сирлеләр чемпион булып китә, банкротҡа әйләнеүселәр ҡабат бизнес үренә күтәрелә, тыуған ерендә бер ниндәй белем алмаған меңдәрсә иммигрант яңы урында университет профессорҙары һәм компания президенттары кимәленә тиклем күтәрелә. Донъяла барыһы ҡаршы булғанда, кеше тере ҡалыу өсөн рухи ныҡлыҡҡа өйрәнә. Был эске сынығыу һуңынан серле ҡоралға әүерелә.Ҡыҫҡаһы, һәр кемдең һайлау хоҡуғы бар. Әгәр тормошта нимәлер килеп сыҡмай икән, бары тик энергиябыҙҙы уға төбәмәгән өсөн генә был. Мәсьәлә: "Ни өсөн ул минең өсөн мөмкин түгел?" - тигән һорауҙа түгел, ә: "Ни өсөн мин уны эшләргә теләмәйем?" - тиеүҙә. Үҙеңә: "Нимә генә булмаһын, мин быны эшләйем!" - тип әйт, һәм тормош үҙе һиңә ярҙам итә башлаясаҡ. Аллаһы Тәғәлә бер ваҡытта эргәңә килеп: "Хәҙер мин һиңә уңышлы булырға рөхсәт итәм!" - тип әйтмәйәсәк. Бындай рөхсәтте һәр кем үҙенә-үҙе бирергә тейеш.

## Иң мөһиме - башларға!

Берәй ваҡыт һеҙҙең менән шулай булғаны бармы? Нимәләр эҙләй башлайһығыҙ ҙа, уны тапҡансы, әллә күпме нәмәләрҙе аҡтарып сығаһығыҙ. Тапҡас, бөтөн нәмәне рәтләп, таҙалайһығыҙ һәм ҡапыл башығыҙға уй килә, ә бит бүлмәне көн һайын тәртиптә тоторға була... Һәм план ҡорола башлай, төн уртаһына тиклем бүлмә таҙалана, хатта эҙләгән нәмәгеҙ әллә күпме күҙегеҙгә салынһа ла уға иғтибар итмәйһегеҙ, сөнки бүлмә таҙалауҙан ҙур кинәнес табаһығыҙ.

Бында беҙ "генераль таҙартыу принцибы" менән эш итәбеҙ, ул былай ти: һәр эшкә теләк уны эшләй башлағас килә. Был һәр шөғөлгә ҡарата ла ҡулланыла: отчет яҙаһыңмы, соҡор ҡаҙыйһыңмы, һалым декларацияһын тултыраһыңмы, яраҡкан машинанда соҡсонаһыңмы... Эшкә башкөлә сумһаң, ул үҙе һине энергия һәм күтәренке кәйеф менән тулыландыра башлай. Беҙ бик йыш: "Бына хәл генә йыйып алайым да, иртән йүгерә башлайым!" - тип хаталанабыҙ. Юҡ! Башта иртән йүгерә башла. "Ҡыҙыҡлы була башлау менән өйгә эшемде эшләй башлаясаҡмын". Был да дөрөҫ түгел. "Энергия туплайым да, үҙ бизнесымды асасаҡмын". Юҡ һәм юҡ! Энергия һәм энтузиазм эш башлағас килә. Энергия тулыуы - эшкә башкөлә сумыу һөҙөмтәһе. Бөтөн ғилләә шунда - бары тик башларға кәрәк.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

✓ Боҙоҡ кешеләр менән ҡатнашып йәшәү зарарлы булһа ла, улар менән дошманлашып та бармағыҙ. Дошманлашмаһағыҙ, донъяғыҙ имен булыр.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# "КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Сибай ҡалаһында йәшәүсе хөрмәтле уҡытыусыбыҙ

**Бикташев Рәүеф Ғәлләм улын**

**80 йәшлек юбилейы** менән ҡайнар ҡотлайбыҙ! Сыңғыҙ мәктәбендә Һеҙ безгә Австралия һунарсыларының ҡоралы - бумеранг яһарға өйрәткәйнегеҙ. Был ҡорал һунарсының ҡулына кире әйләнеп ҡайта. Тап шуның кеүек, Һеҙҙең безгә һалған хеҙмәтегеҙҙе, фиҙаҡәрлегегеҙҙе оло рәхмәт итеп ҡайтарабыҙ, хөрмәтле Рәүеф Ғәлләм улы! Йөҙ йәшәгеҙ!

**Барлыҡ уҡыусыларығыҙ исеменән: Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай, Әхиәт Ғәйетбаев, Таһир Хәмитов.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**11 ноябрь "Хыялый"** (С. Әбүҙәр), лирик комедия 12+
**12 ноябрь "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Ғәйетбаев), комедия 16+
**14 ноябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Калдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+
**15 ноябрь "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим) 12+
**16 ноябрь "Джут"** (О. Жанайдаров), драма 16+
**17 ноябрь "Нәркәс"** (И. Йомағолов), мелоромантик трагедия 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 ноябрь "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия. Башлана 18.00 12+
**14 ноябрь "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 11.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**11 ноябрь "Золотой волос"** (М. Супонин). Башлана 12.00, 14.00 0+
**"Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев). Башлана 19.00 16+
**12 ноябрь "Три поросенка"** (С. Михалков). Башлана 12.00, 14.00 0+

**44-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Янбаева. Грамматика. Көрт. Шарлама. Үтәбай. Бразилия. Йома. Нафиҡова. Журнал. Риторика. Ишкинин. Ғәниева. Көйә. Имашева. Носилка. Наҙ. Алып. Таҡмаза. Натурализм. Тарантас. Наза. Игәт. Липки. Роман. Нияз. Ағуна. Йүкә. Муллаҡаев. Квант. Арҡа.

**Вертикаль буйынса:** Янки. Ғәйнетдинов. Кактус. Зар. Таити. Исмена. Инәй. Груша. Ҡарағужина. Айҙар. Ғимаев. Ярмуллин. Латин. Атлант. Майор. Аптека. Малай. Ҡара. Бажа. Түләк. Аҡтар. Ғаилә. Ваба. Лавр. Аяҡлы. Ижаби. Псәнчин. Етегән. Аласа. Яхина. Ауыҙ. Союз.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Ноябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (24) дүшәмбе | 7:15 | 8:45 | 13:30 | 15:45 | 17:15 | 18:45 |
| 14 (25) шишәмбе | 7:17 | 8:47 | 13:30 | 15:43 | 17:13 | 18:43 |
| 15 (26) шаршамбы | 7:19 | 8:49 | 13:30 | 15:41 | 17:11 | 18:41 |
| 16 (27) кесе йома | 7:21 | 8:51 | 13:30 | 15:40 | 17:10 | 18:40 |
| 17 (28) йома | 7:23 | 8:53 | 13:30 | 15:38 | 17:08 | 18:38 |
| 18 (29) шәмбе | 7:25 | 8:55 | 13:30 | 15:37 | 17:07 | 18:37 |
| 19 (30) йәкшәмбе | 7:27 | 8:57 | 13:30 | 15:35 | 17:05 | 18:35 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ДУҪЛЫҠ - ИЛСЕ




**Белемгә, татыулыҡҡа, берҙәмлеккә, дуҫлыҡҡа саҡыра дин. Һәм беҙ, әлхәмдүлииләһ, шул саҡырыуҙарҙы ҡабул итеп киләбеҙ.**

"Дуҫлыҡ, - тигән Ризаитдин бин Фәхретдин, - күңелдәр араһында йөрөгән илсе, ауыр ваҡыттарҙа бер-береңә ярҙамлашыуға сәбәпсе, аралағы яҡшы мөнәсәбәт. Әгәр ҙә яҡшы мөнәсәбәт ике яҡтың да ихласлығы, мөхәббәте тигеҙ булғанда тыуһа, ул дауамлы була...

Дине бөтөн, аҡылы камил, нәсәбе аҫыл, фекере дөрөҫ, әҙәбе урынында булған кешеләрҙе табығыҙ. Быңдай кешеләр - ауырыған ваҡыттарығыҙҙа йыуатыусы, дауа, сәләмәт ваҡытығыҙҙа - биҙәк, мәшәҡәтле ваҡытығыҙҙа - таяныс, бойоҡҡан ваҡыттарығыҙҙа - күңел күтәреүсе. Быңдай кешеләр үҙегеҙ алыҫ-алыҫтарға киткәндә - доға-ла ҡалыусы, бергә йәшәгәндә хәлегеҙҙе белеп тороусы булыр. Байып китһәләр - араларҙы өҙмәҫ, һеҙ үҙегеҙ ауыр хәлгә ҡалһағыҙ - айырылып китмәҫ. Шуға ла йәшәгән йылдарығыҙҙа һеҙҙе ахирәттә осрашыу шарты булған үлемдән башҡа бер нәмә лә айырмаһын...

...Боҙоҡ кешеләр менән ҡатнашмағыҙ, улар юлына инмәгеҙ, уларға ышанмағыҙ. Үндай кешеләрҙең иң һөйөклө эше - боҙоҡлоҡ, әҙәм балаларын һәләкәткә илтеү. Әҙәм балалары ашамай-эсмәй тора алмаған кеүек, күңеле боҙоҡ булғандар ҙа этлек, уҫаллыҡ эшләмәй тора алмай, кешегә зыян эшләмәһәләр, күҙҙәренә йоҡо инмәй.

Боҙоҡ кешеләр менән ҡатнашып йәшәү зарарлы булһа ла, улар менән дошманлашып та бармағыҙ. Дошманлашмаһағыҙ, донъяғыҙ имен булыр".

## СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# "АҠБУҘАТ" ЕЛЕП КИЛӘ...

**17-19 декабрҙә Башҡортостандың баш ҡалаһында IV "Көмөш Аҡбуҙат" милли һәм этник кинофестивале уҙғарыла. Сара режиссер Сабит Ҡорманбәковтың "Оралман" (Ҡаҙағстан) фильмы менән асыла.**

Конкурс программаһында һигеҙ тулы метражлы нәфис фильм ҡатнаша. Улар араһында Рәсәй, Канада-Греция, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Сербия, Һиндостан, Иранда төшөрөлгән фильмдар, шулай уҡ Башҡортостандан күренекле шағир һәм йәмәғәт эшмәкәре Шәйехзада Бабичка арналған "Бабич" һәм "Өфөнән һөйөү менән" фильмдары бар. Рәсәй, Үзбәкстан, Афғанстан, Грузия, Әзербайжан-Иран, Непалдан авторҙар Өфөлә ете ҡыҫҡа метражлы фильм тәҡдим итә. Улар иҫәбендә республика вәкилдәре - Фәрзәнә Утарбаеваның "Ҡырағай"ы һәм Руслан Юлтаевтың "Кластан тыш дәрес"е бар. Ете документаль эш араһында Башҡортостандан Вилүрә Иҫәндәүләтованың "Башҡорт шәле" фильмы ҡатнаша.

Шулай итеп, өс көнгә Өфө мәҙәни үҙәккә әүерeләсәк һәм төрлө төбәктәрҙән, илдәрҙән режиссерҙарҙы, актерҙарҙы, продюсерҙарҙы йыясаҡ. Кинофестивалде ойоштороусылар: Башҡортостан Хөкүмәте, Мәҙәниәт министрлығы, Өфө хакимиәте булышлығында "Башҡортостан" киностудияһы.

# ТАҒЫ "ZAMAN"ДАР...



**Германияла Өфө һәм Галле ҡалалары араһындағы туғандаш мөнәсәбәттәрҙең 20 йыллыҡ юбилейы һәм "Башҡортостан дуҫтары" ("Freunde Baschkortostans") ойошмаһының 20 йыллығы билдәләнә. Аҙна Мәскәүҙең "Zaman" башҡорт төркөмә концерты менән тамамланасаҡ.**

Мәскәү музыканттары 25 ноябрҙә Галлела Саксония-Анхальт ере Мәҙәниәт министрлығының шәхси саҡырыуы буйынса сығыш яһай. "Был беҙҙең Германияға тәүге сәфәребеҙ түгел, шуға немец тамашасыларын яҡшы беләбеҙ. Был юлы яңы тамаша әҙерләйбеҙ. Беҙгә хатта Яҡутстанда гастролдәрҙе күсерергә тура килде", - тип хәбәр итте "Башинформ" агентлығына төркөм етәксеһе Радмир Мөфтәхин."Zaman" төркөмө программаһында башҡорт халыҡ йырҙарының заманса аранжировкалары, төркөмдөң автор композициялары, шулай уҡ бер нисә немец хиты яңғырай. Төркөм үҙенең эшмәкәрлеген 2014 йылда башлаған. Дүрт йылға яҡын осорҙа музыканттар Европаның һәм Азияның алты илендә булды, Башҡортостан Республикаһы делегацияһы составында сит илгә сыҡты, Ригала ЮНЕСКО сараларында Рәсәй һәм Башҡортостан исеменән сығыш яһаны.

# "АЛТЫН БИТЛЕК"КӘ КИТТЕК...



**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының "Антигона" спектакле "Алтын битлек" театр премияһына 7 номинация буйынса дәғүә итә.**

"Алтын битлек" Рәсәй милли театр премияһы һәм фестиваленең рәсми сайтында 2016/2017 иҗад миҙгеле буйынса премияға дәғүә итеүселәрҙең исемлеге баҫылды. Жан Ануй әҫәре буйынса сәхнәләштерелгән "Антигона" драмаһы "Ҙур формалағы иң яҡшы спектакль" номинацияһында, шулай уҡ спектаклдең режиссеры Фәрит Бикчәнтәев "Иң яҡшы режиссер эше"; Антигона ролен башҡарыусы Лилиә Ғәлина "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле"; Креон ролен башҡарғаны өсөн Олег Ханов "Иң яҡшы ир-егет роле"; Исмена роле өсөн Гөлмирә Исмәғилева "Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле"; Алмас Әмиров "Икенсе пландағы иң яҡшы ир-егет роле"; Альберт Нестеров "Иң яҡшы рәссам эше" номинацияларында тәҡдим ителә. Фестиваль 2018 йылдың февраленән апрелгә тиклем Мәскәүҙә үтә.

Башҡорт дәүләт академия драма театрының "Кәкүк ояһы" спектакле (К. Кизи, реж. А. Абушахманов) 2006/2007 миҙгелдә өс номинацияға тәҡдим ителгәйне. 2014/2015 миҙгелдә "Ҡара йөҙҙәр" спектакле (М. Ғафури буйынса А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инсц., реж. А. Абушахманов) 5 номинацияға дәғүә итте. Театрҙың төп рәссамы Альберт Нестеров "Костюмдар буйынса иң яҡшы рәссам эше" номинацияһында еңеү яуланы. 2015/2016 миҙгелдә "Джут" спектакле (О. Жанайдаров, реж. А. Абушахманов) фестивалдең лонг-листына эләгеп, "Битлек плюс" программаһы сиктәрендә Мәскәүҙә күрһәтелде.

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәкиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# ОЖМАХТАҒЫ УРЫН...

## кемгә тәтей?

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ул үҙен аҡыл эйәһе тип иҫәпләй һәм үҙенең ҡасан да булһа был донъяны ташлап китәсәген аңлап, бер теләк менән генә янып йәшәй: теге донъяла ожмахҡа эләгергә, бының өсөн фанилыҡта саҡта мөмкин тиклем күберәк изге эштәр башҡарып, Хоҙай алдында яҡшы күренергә. Шуға ла ул мосолмандарға фарыз бар ҡағиҙәләрҙе еренә еткереп үтәй, намаҙҙарын да ваҡытында уҡый. Берҙән-бер көндө ул, үҙең генә гонаһ ҡылмауың етмәй, ә әйләнә-тирәләгеләрҙе лә насар эштәрҙән ҡурсырға кәрәк, тигән ҡарарға килә. Уның иғтибары күршеһенә, бик хәтәр ҡомарлы уйынсыға йүнәлдерелә. Күршеһенең уйынға әүәҫлеге ауырыуға әйләнгән була. Уйнамаҫҡа, тип, әллә күпме ант итһә лә, һүҙендә тора алмай, ташлай ҙа, яңынан башлай. Аҡыл эйәһе күршеһен был насар ғәҙәтенән арындырырға була. Ләкин өгөтләүҙәр генә бер файҙа ла бирмәҫен дә аңлай. Ҡомарлы уйын - яуызлыҡ, ә уның менән мауығыу - ул оло гонаһ икәнен кем белмәй! Шуға ла аҡыл эйәһе икенсе төрлө юл һайлай: күршеһе ҡомарлы уйын уйнарға киткән һайын уның өй тупһаһына ауыр гонаһ йөгө тураһында иҫкәртеү өсөн бер таш һалып ҡуя. Уйынсы өй тупһаһы алдындағы таш өйөмө үҫкәндән-үҫә барғанын күрә. Ул күршеһендәге аҡыл эйәһенең уны өгөтләмәй, һүҙҙәр менән битәрләмәй генә уны гонаһы тураһында иҫкәртеүен аңлай. Шуға ла йортона ҡайтҡан һайын уйынсы үҙенең ихтыярһыҙлығы өсөн оялып, шулай тип уйлана:"Күршеһе, бөтөнләй сит кеше, уның насар ғәҙәттәре өсөн көйөнә, Алланан уның гонаһтарын ярлыҡауҙы һорай. Мине ошо насар ҡылығымдан ҡотҡарыуға күпме көс сарыф итә. Ниндәй түбән йәнле әҙәм мин! Нисек гонаһлымын мин! Күршемә рәхмәтле булыуҙан йөрәгем шартлар сиккә етә, ләкин ул да минә ярҙам итә алмай, мин был бысраҡҡа шул тиклем ныҡ батҡанмын. Ҡайһы миңә, ҡайһы!" Бер саҡ уйынсы хатта мәсеткә лә бара һәм күршеһенең уға күрһәткән изгелеген тейешенсә баһалаһын өсөн Хоҙайға ялбара.**

**Күп йылдар үтә. Баяғы гонаһлы уйынсы ла, уны ҡурсалаусы изге кеше лә баҡыйлыҡҡа күсә. Аллаһ илсеһе уларҙы баҡыйлыҡ ҡапҡаһы алдында ҡаршылай ҙа, "Һин минең менән ожмахҡа бараһың", тип, уйынсыға ишаралай. Ә изге кешегә тамуҡ ҡапҡаһын күрһәтә. "Юҡ, юҡ, - тип ҡысҡыра уйынсы. - Һин яңылыштың. Минең урыным ожмахта түгел, мин оло гонаһ эйәһемен. Нисек кенә ҡыйын булмаһын, мин быны яҡшы беләм. Ожмахтағы урын минең изге күңелле күршемдеке..."**

**"Һинең икеләнеүҙәрең урынлы түгел, - ти Аллаh илсеһе. - Мин Хоҙай ҡушҡанды ғына эшләйем. Күп һөйләнеп, ожмах ҡапҡаһы алдындағыларҙы тотҡарламаҫ өсөн, аңлатам: һин гонаһ ҡылдың - һүҙ юҡ. Әммә гонаһтарың тураһында иҫкә алған һайын һин оялыу һәм үкенеү кисерҙең. Ә йөрәгеңдә һин оло изгелек йөрөттөң - һинең турала хәстәрлек күреүсе күршеңә рәхмәт тойоһоң ул. Күршеңә килгәндә иһә, ул бөтөн ошо йылдар буйы үҙенең нәфсеһен генә ҡандырҙы. Ул һинең гонаһлы йәнеңдән алда иң тәүҙә үҙенә сауап алыу тураһында уйланы. Ундай тәкәбберлек һинекенә ҡарағанда ла гонаһлыраҡ. Һинең тупһаңа өйгән һәр ташы уның камил булмауын белгерткән үлсәү яғында булып сыҡты..."**

## ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

79. **Зөһрә Ҡотлогилдина "Ялан сәскәләре" шиғырҙар йыйынтығы.** Зөһрә Ҡотлогилдинаның был китабы уҡыусы иғтибарын тыйнаҡлығынан уҡ йәлеп итә - күҙҙең яуын алырлыҡ, сағыу ялан сәскәләре төшөрөлгән унда. Йөкмәткеһе лә шул сәскәләр төҫлө: төрлө темаға иҗад ителгән, тәү ҡарамаҡҡа ябай, әммә тәрән мәғәнәле, фәлсәфәүи, лирик шиғырҙары, йырҙары, поэмалары ингән. Уҡыусының күңел ҡылдарын тирбәлткән илаһи шиғри юлдар әсә һәм бала мөнәсәбәттәре, мөхәббәт,ил яҙмышы, тормош асылы тураһында тәрән уйға һала.

"Кемгә - йыр,
Кемгә - ер,
Кемгә - ир,
Кемгә -ил.
Кемгә нимә ҡайғыһы?
Һин шуларҙың ҡайһыһы?" - тип өндәшә уҡыусыһына шағирә.

80. **Йомабикә Ильясованың "Мин үҙеммен һаман" шиғырҙар йыйынтығы.**
"...Милләтебеҙ ниндәй, ҡурай шундай:
Тик тәбиғәт - барса булмышта,
Ябай ғына, ә тылсымы сикһеҙ,
Әскерһеҙ көй булып тулышһа", - тигән шиғри юлдарҙа Йомабикә Ильясова ҡурай һәм башҡорт халҡының асылын ғына түгел, үҙ шиғриәтен дә һынландыра. Шағирәнең ижады тап шундай - тылсымлы, әскерһеҙ, уның ҡыҫҡа ғына шиғыр юлдарына ла бөтә ғаләм һыйған.

"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 10 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 2293/11